*Рауил БИКБАЕВ*

# Атлы азамат

Беҙ — һуғыш балалары. Күптәребеҙ атайһыҙ үҫтек, әммә атһыҙ үҫмәнек. Атайҙарыбыҙ беҙҙе атҡа мендермәһә лә, бөтә ауыл малайҙары һымаҡ ат һыртында, ат араһында сыныҡтыҡ. Ат һарайы ололарҙың ғына түгел, малайҙарҙың да яратып йыйылыр урыныбыҙ булды. Ҡуш йөрәкле дөлдөлдәр, беҙҙең яҡтарҙағы атаҡлы арғымаҡтар тураһындағы олатайҙарҙан ишетеп ҡалған, күптәре легендаға әйләнгән һүҙҙәрҙе йыш һөйләй, шундай малдарҙы беҙ ҙә күрһәк икән тип хыяллана торғайныҡ.

Элек алыҫ ҡышҡы юлдарҙа санала үткән кешеләрҙе ат еле һуғып ҡуймаһын тип борсолалар ине. Ат еле ҡағылған юлсылар ҙа булғандыр, әммә башҡорт кешеһенә ат ене борон сәңгелдәктән үк ҡағылған. Ир-егет менән ат араһында айырылғыһыҙ бәйләнеш барлыҡҡа килгән. Улар ғүмер буйы юлдаштар, хеҙмәттәштәр, кәрәк саҡта яуҙаштар. Юлдаштар, яуҙаштар ғына түгел, серҙәштәр, фекерҙәштәр. Үҙенең шатлыҡтарын да, ҡайғыларын да, ҡәҙерле мөхәббәт хистәрен дә, ҡәһәрле нәфрәтен дә ир-егет кешегә бик белгертеп бармаҫҡа тырышҡан, әммә атынан йәшермәйсә һөйләгән, уның менән төптәге серҙәрен дә бүлешкән. Хатта исемдәре лә уларҙың береккән бит, телебеҙҙә ир-ат тигән һүҙ тыуған.

Яндарында аттары булмаһа ла, күмәкләшеп бер ерҙә торған ирҙәрҙе ир-ат йыйылған тигәндәр. Йылҡы малы элекке һымаҡ ерҙе ҡаплап йөрөмәһә лә, күп ирҙәр аттан күптән һәм ғүмерлеккә айырылһа ла, әле лә ир-ат тиҙәр. Ҡеше менән танышҡанда “Атың кем?” тип, исемен һорағандар. “Атҡаҙанған” тигән хөрмәтле дәрәжә лә шулай барлыҡҡа килгән. Һәр башҡорт атҡаҙанған тигән маҡтаулы исемде яулай алмаһа ла, һәр ир-азаматыбыҙ борон-борондан атҡа атланған башҡорт булған. Уның исеме-аты атлы башҡорт булған.

Атҡа атланған башҡорт — ҡанатлы башҡорт. Атлы ир — ҡанатлы ир. Улар илдең күпме тарафтарындағы алыҫ-алыҫ юлдарҙы бергә үткәндәр. Күпме яуҙарҙа алышып, Париждарға лә барып еткәндәр, Ҡарпатта ла тыуған яғын һағынғандар, Уйыл буйҙарында ил һаҡлағандар. Яраланған батырҙы тоғро аттары яу яланынан алып сыҡҡан, үлемдән ҡотҡарған. Батша хөкүмәте Урта Азияны яулау өсөн ойошторолған походтарҙа ҡарҙар яуып, ҡаты һыуыҡтарҙа аттар ҡырылған, яугирҙар туңған. Аты ла, үҙе лә аҙыҡһыҙ, ышыҡһыҙ ҡалған яугир “Һыр” йырындағы “атҡайҙарым арыҡ, кейемем юҡ, нисек уҙғарырмын ҡыш көнөн?” тигән һүҙҙәрҙе әйткән. Илде яҡлап, ирек даулап күтәрелгән ҡыйыу ирҙәр ғаиләләре менән Себерҙәргә һөрөлгәндә, улар менән бергә аттар ҙа Урал еренән айырылғандар. Әйләнеп ҡайтыуҙар бик икеле. Хушлашыу

ҡайһы саҡта бәхилләшеүгә әйләнгән. Ир-егеттәргә генә түгел, аттарға ла бик ҡыйын булған. Ләкин кеше генә түгел, ат та тыуған ерҙәрен һағынған. Бөйөк Ватан һуғышынан һуң әллә ниндәй мөғжизәләр менән дөрөç юлды табып, Башҡортостанға әйләнеп ҡайтҡан ат тураһында ла уҡыған булды. Тыуған ерҙән айырылған саҡтарҙа "Минең атым боролоп ҡарайҙыр", "Башҡынайын бороп бер ҡарай" тигән юлдар тыуғандар. Боронғо оҙон йырҙарыбыҙ сәхнәләрҙән бөгөнгө һымаҡ йыш йырланмаған илленсе-алтмышынсы йылдарҙа төрлө кисәләрҙә "Азамат" айырыуса йыш башҡарылыр ине. "Азамат" йырының "Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы" тигән һүҙҙәр беҙ йәш саҡтарҙа телдән төшмәç ине. Мин был һүҙҙәр урынына "Ҡайҙа ғына бармай, ҡайҙа йөрөмәй ат тояғы менән ир башы" тип йырлағандарын да беләм. Ысынлап та, ҡайҙарҙа ғына йөрөһә лә, ниҙәр генә күрһә лә, башҡорт үҙенең аты менән йөрөгән, аты менән күргән. Атлы яугир эйәрҙә ултырғаны өсөн генә түгел, үҙенең көс-ҡеүәте менән йәйәүленән юғарыраҡ баһаланған.

"Ҡөрьән"дә "Яу табышы" тигән сүрә бар. Тәфсирҙәрҙә аңлатыуҙарынса, улъяны ғәҙел итеп бүлгәндә, яу атына ике өлөш, һыбайлыға бер өлөш, йәйәүле яугирға бер өлөш бирелгән. Яу атының өлөшө яугирҙыҡына ҡарағанда ике тапҡырға артығыраҡ һаналған.

Бик боронғо замандарҙа башҡорттар, үҙҙәренең тотемдары һанап, күп кенә хайуандарҙы изгеләштергәндәр. Бигерәк тә халыҡҡа юл күрһәткән изге бүре тураһында риүәйәттәр күп. Был яҡтан ат ул бүренән ҡалышалыр. Ләкин башҡорттоң бөйөк хазинаһы — халыҡ ижадында аттан башҡа бер генә хайуан хаҡында ла ул тиклем йөрәктән сыҡҡан һүҙҙәр әйтелмәгән. Күпме йырҙарыбыҙҙа ат тураһында береһенән-береһе матурыраҡ, береһенән-береһе мәғәнәлерәк юл-

*Башкир. И.Г.Шадов. Гравюра. 1813 г.*



дар һоҡландыра. Мин уларға ғүмерем буйы ғашиҡ булдым, башҡорт фольклорындағы төрлө жанрҙарҙа ат тураһындағы шиғри юлдарҙы бергә туплап, үҙенсәлекле бер китап төҙөргә электән үк хыялландым. Был хыялым оҙаҡ йылдар буйы хыял ғына көйө ҡалды. Береһе артынан береһе өйөлөп килгән эштәр был уй-теләгемде тормошҡа ашырырға мөмкинселек бирмәне. Ниһайәт, аттар тураһында халҡыбыҙ быуаттар буйына ижад иткән шиғри юлдарҙың байтағын бергә йыйып, ошо китапты төҙөй алдым. Яҙмышы ир яҙмышынан айырылғыһыҙ булған күпме аҡыллы башҡорт аттары хаҡында йөҙәрләгән йырҙарҙа, атаҡлы эпостарыбыҙҙа, халыҡ ижадының башҡа төрҙәрендә тыуған шиғри һүҙҙәр уҡыусылар өсөн дә ҡыҙыҡлы булыр тип өмөтләнәм.

* * *

Иң элек "Урал батыр" эпосына иғтибар итәйек. Әҫәрҙә ваҡиғалар туфан ҡалҡҡан һәм донъяны баҫып алған һыу кире ҡайтҡан, ер асылып килгән бик боронғо замандарҙан башлана. Башҡа халыҡтарҙа ла ошо дәүерҙәр тураһында һөйләүсе мифтар бар. Мәҫәлән, шумерҙарҙың "Гильгамеш" эпосында, туфан ҡалҡырын алдан белеп, бик ҙур кәмә әҙерләү һәм ташҡын ваҡытындағы ваҡиғалар бәйән ителә. Бында Гильгамеш үҙенең ҡалаһы Урукты эҙләй. "Урал батыр"ҙа хәл башҡаса. Дүрт яғын диңгеҙ ураткан урында йәшәүсе Йәнбирҙе менән Йәнбикә "Ҡайҙан бында килеүен, ата-әсә, ер-һыуы ҡайҙа тороп ҡалыуын үҙҙәре лә онотҡан, ти". Уҙғандар менән бәйләнеш өҙөлгән, тормош өр-яңыса башланған. Йәнбирҙе менән Йәнбикә "Һунарҙа ат менмәгән, ҡулға



һаҙаҡ тотмаған, менәренә — арыҫланды, балығына — суртанды, ҡошҡа сөйгән шоңҡарҙы, ҡан һурырға һөлөктө үҙ иштәре яһаған”.

Шуныһын иҫтә ҡалдырайыҡ: кеше һунарға арыҫлан менеп йөрөй. Ҡулында уҡ-һаҙағы юҡ. Ҡейектәрҙе кейектәрҙән тоттора. Һунарсылыҡ менән көн күрә.

Йәнбирҙе ҡарт Йәншишмәне табырға тип, “Ике улын ике арыҫланға мендереп оҙатҡан, ти”. Ағалы-ҡустылы ике егет оҙон юлдар үтә, ҙур ҡыйынлыҡтарға тап була, әллә күпме ваҡиғаларҙың үҙәгендә ҡайнай. Мин шуларҙың тәүгеһенә — Ҡатил батшаның ер тырнап, үкереп, егетте “елгә осоп туҙғансы мөгөҙөмдә ҡаҡлармын” тип, ужарланып килгән тауҙай үгеҙе менән Урал батырҙың алышҡанына туҡталам. Аяуһыҙ алыш алдынан Урал батыр был дәһшәтле хайуанды ошолай тип киҫәтә: “Донъяла һин кешенән көслө юғын танырһың, үҙең түгел, тоҡомоң менән кешегә ҡол булырһың”. Тапарға, ҡанға туҙҙырып мөгөҙөнә элергә әҙер торған был ғәйрәтле хайуанды Урал батыр еңә. Көрәшкәндә тубығынан ергә батҡан үгеҙҙең ауыҙынан ҡара ҡан аға, өҫкө теше төшә, дүрт тояғы урталайға ярыла. Йәғни ҡырағай мал эйәләштерелгән үгеҙгә, әле беҙ күреп күнеккән мөгөҙлө йорт хайуанына әйләнә. Ҡатил батшаның еңелгән үгеҙенә Урал батыр былай ти: “Үҙең түгел, балаң да мәңге ҡалыр шул көйсә. Ҡеше көсөн күрҙең һин, кешегә мөгөҙ сөйҙөң һин, кешегә мөгөҙ сайҡама, еңермен тип айҡанма!”

Шулай итеп, ҡаты алыштан һуң Урал батыр үгеҙҙе баш эйҙерә, уны кешенең ҡоло итә. Һунарсылыҡ мөхитендә тыуып үҫкән кеше малды ҡулға эйәләштерә башлай, малсылыҡ дәүеренә күсә. Артабан Урал батыр атлы була, был хайуан уның тоғро юлдашына әйләнә. Һомайҙың егеткә Аҡбуҙат бүләк итеүе эпостағы төп ваҡиғаларҙың береһе. Атһыҙ батыр атҡа атлана, уның донъя менән аралашыу тиҙлеге, тормоштоң үҫеш мөмкинлектәре күпкә арта. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, Аҡбуҙаттың эйәренең алтын ҡашына тағыулы торған алмас ҡылыс та бик мөһим хәлдәргә ишара яһай түгелме һуң? Йәнбирҙе һунарға һаҙаҡһыҙ ғына йөрөһә, уның улы Урал Аҡбуҙатлы ла, алмас ҡылыслы ла була. Ҡылыс әҙерләү оҫталығына ирешеү иһә кешелек йәмғиәтенең яңы үҫеш кимәленә күтәрелеүен раҫлай бит.

Беҙҙең фольклорсы ғалимдар “Урал батыр” эпосының ентекле өйрәнелгән “Гильгамеш” менән бер дәүерҙә, хатта унан да алданыраҡ тыуған тиҙәр. Һүрәтләнгән ваҡиғалар үҙҙәре үк әҫәрҙең боронғолоғон күрһәтә. Миненсә, бының шулай икәнлеген конкрет миҫалдар, ҡыҙыҡлы параллелдәр килтереп, асыҡ итеп раҫларға мөмкин. Мәҫәлән, яңы эраға тиклемге дүртенсе-өсөнсө мең йыллыҡтар ҡушылған осорҙа көслө туфан ҡалҡып, Тигр менән Евфрат йылғалары аҡҡан ерҙәрҙе һыу баҫҡан. Бындай ташҡындар башҡа яҡтарҙа ла булғандыр тип фараз итергә мөмкин. Ҡырағай кейектәрҙе йорт хайуандарына әйләндереүҙең ун биш мең йыллыҡ тарихы булғанлығы мәғлүм. Ә бына аттарҙы эйәләштереү тарихын тикшереүселәр кешелек үҫешен тиҙләткән, уның эшләү мөмкинлектәрен нығ арттырған был ваҡиға яңы эраға тиклемге өс мең йыллыҡта булған тиҙәр. Һәр хәлдә, тимер быуат етмәҫ элек кеше ҡылыс тигән хәрби ҡорал әҙерләй алмаған. Урал батыр үҙе ҡоллоҡ йәмғиәте менән таныш булмаһа, Ҡатил батшаның үгеҙенә “Үҙең түгел, тоҡомоң менән кешегә ҡол

булырһың” тип әйтә алмаҫ ине. Урал батырҙың бик күп ҡолдарҙы ҡотҡарыуы ла ул йәшәгән дәүерҙең үҙенсәлеген күрһәтә.

Тағы ла шуны өҫтәп әйтмәксемен. Дүрт яғын диңгеҙ ҡаплаған урындан башланған юл Урал батырҙы ниндәй киңлектәргә алып сыға. Уның батырлығынан диңгеҙ сигенә, тауҙар күтәрелә, үҙе һәләк булғас, тәне ошо ерҙең ҡуйынындағы аҫыл байлыҡ була. Урал ере, уның йәннәт һымаҡ тәбиғәте башҡорттарҙың изге Ватанына әйләнә. Һомай ошо ергә ҡоштарҙы, башҡа йәнлектәрҙе эйәләштерә, Ҡатил батшаның үгеҙе һыйыр көтөүҙәрен эйәртеп ҡайта, Аҡбуҙат йылҡы өйөрҙәрен бында килтерә. Урал батырҙың улдары Урал тауҙарынан башланған матур йылғаларға юл һалалар. Башҡорттоң Ватаны бына шулай барлыҡҡа килә.

Әлбиттә, был мәшһүр ҡомартҡыбыҙҙың ҡасан тыуғанлығын йылын, быуатын билдәләп аныҡ ҡына әйтеү мөмкин түгел. Ләкин әле аталған билдәләр буйынса уның боронғолоғо, яңы эраға тиклемге мең йыллыҡтарҙа барлыҡҡа килгәнлеге бәхәсһеҙ. Әгәр туфан ҡалҡыуы, малдарҙы эйәләштереү, ҡылыслы булыу күренештәре нәҡ улар булған саҡтарҙа уҡ халыҡ хәтеренә уйылмаһа, шиғри һүҙҙә теркәлмәһә, был ваҡиғалар тураһында уларҙан ныҡ алыҫлашҡан яңыраҡ дәүерҙәрҙә бындай эпосты хатта бик зирәк халыҡ та ижад итә алмаҫ ине.

* * *

Тарихҡа инеп киттек. Аттарыбыҙға әйләнеп ҡайтайыҡ, “Урал батыр”ҙы тағы ла байҡайыҡ. Аҡбуҙатты эпоста һүрәтләгәнсә, яңынан күҙ алдыбыҙға баҫтырайыҡ. Уның буй-һынында, ҡараштарында, хәрәкәттәрендә ни тиклем матурлыҡ, зифалыҡ, камиллыҡ, көс-ғәйрәт һәм етеҙлек. Аҡбуҙатты яратып тасуирлаған юлдарҙы был китапта яңынан уҡып ҡарағыҙ. Һәр береһе хайран ҡалдыра, һәр һүҙ ни тиклем тапҡыр әйтелгән. Аттың үҙенсәлектәрен сәсәндәрҙең зирәк ҡарашы ғәжәп үткер күргән. Башҡа халыҡтарҙың фольклорында ла ат төрлө яҡлап данланған. Ләкин был йәһәттән “Урал батыр”ға тиңләшерлек миҫалдарҙы еңел генә табып булмай торғандыр. Был әҫәрҙә Аҡбуҙатты һынландырыу һүҙ менән ҡойолған гениаль һәйкәл дәрәжәһендә.

Башҡорт күңелендә атҡа ҡарата оло хөрмәт, уны яратыу, уға һоҡланыу традициялары быуаттан-быуатҡа, әҫәрҙән-әҫәргә дауам иткән. “Аҡбуҙат” эпосында Урал батырҙан ҡалған ҡанатлы толпар менән алмас ҡылыс уның ейәне Һәүбән ҡулына күсә. Бында ла Аҡбуҙаттың һүҙ менән ижад ителгән сағыу, һоҡландырғыс һүрәтен оноторлоҡ түгел.

Ваҡиғаларҙа ат ҡатнашмаған эпос беҙҙә, моғайын, юҡтыр ул. Тәрән зинданға төшөрөлгән Алпамыша янына ҡанатлы, тоғро аты килеп етә. Ҡатын-ҡыҙ толомона тотоноп, батыр шул тәрән соҡорҙан сыға. Бында ҡатын-ҡыҙҙың көсө ҡанатлы толпарҙың ғәйрәтенән дә юғарыраҡ ҡуйылған, көсһөҙ заттың көсө ни тиклем тәрән асылған.

“Заятүләк менән Һыуһылыу”ҙа йылҡы өйөрө күлдә йәшәй. Асылыкүлдән сығып килгән малдарға Заятүләк әйләнеп ҡарағас, көтөүҙең яртыһы һыу эсенә кире инеп ғәйеп була.

“Аҡһаҡ ҡола”ла хужаһына үпкәләгән ат өйөрҙө ситкә алып сығып китә. “Ҡара юрға”ла аҡыллы юрға егет ғашиҡ булған ҡыҙҙы әүрәтеп алып ҡаса ла егеткә алып ҡайта.

Был йыйынтыҡта ҡобайырҙарҙан да өҙөктәр килтерелде. Һәр һүҙе осҡон сәсрәткән, һәр береһе сәпкә тейә торған ҡобайыр “Тороп ҡалған яңғыҙ тай өйөр булып йөрөр ер — атам кейәү булған ер, әсәм килен булған ер” тип, илде данлаған, “Ҡурҡаҡ булмаҫ ир батыр, өркәк булмаҫ ир батыр, ир-егеттең эсендә эйәрле, йүгәнле ат ятыр” тигән һүҙҙәр менән һыбайлы азаматтарҙы тыуған ерҙе һаҡларға саҡырған.

Башҡорт фольклорының һәр жанрындағы бик күп әҫәрҙәрҙә ат ҡатнаша. Ошондай әкиәттәр, риүәйәттәр, мәҡәлдәр, көләмәстәр бихисап. Йомаҡтар ҙа уларҙы урап үтмәй. “Ҡыйыуҙар ботона ҡыҫтырып, ҡурҡаҡтар етәкләп килтерер”, “Ҡолағы ҡайсылай, ҡойроғо ҡамсылай”, “Тарта ла тарта, ул тартҡан һайын мөлкәт арта” һымаҡ миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. Был китапҡа иһә төрлө жанрҙарҙан мин тик шиғри үрнәктәрҙе генә индерҙем.

* * *

Был үрнәктәрҙең күпселеге йырҙарҙан һайлап алынды. Башҡорт йырҙары башҡорт халҡының йылъяҙмаһы ла, юлъяҙмаһы ла ул. Әҙәм балаһының яҙмышына килгән бәхет тә, бәлә лә кешегә генә түгел, ат башына ла төшкән. Ҡайһы саҡта яу аты йөҙәрләгән яугирҙы ҡаты язанан ҡотҡарырлыҡ көскә әйләнгән. “Ҡара ат” йырында кеше аҡыллы ла, етеҙ ҙә хайуанҡайға “Ынтыл ғына ынтыл, әй, ҡаратым, елбер генә елбер ял өсөн. Аяма ла йәнең, әй, ҡаратым, йөҙ егерме башҡорт ҡаны өсөн” тип, уның буласаҡ ярышта уҙып килерен ялбарып теләгән.

“Ир ғәҙәтен шунан белерһегеҙ, һис һөйләмәҫ кеше ғәйбәтен”, “Дуҫ-ишенән уның дошманы күп, сер бирмәй ҙә йөрөр ир кеше”, “Ир-егеткәй ҡайҙа йөрөһә лә, үҙ илкәйе иҫтән китмәйҙер”, “Ирмен генә тигән ир-егеттең ат башындай булыр йөрәге”, “Малы ла булыр, һаны ла булыр, булмайыҡ беҙ үҙебеҙ сабырһыҙ” — бындай йырҙарҙы йырлаусы һәр саҡ аты менән бергә булған. Ошондай һүҙҙәрҙә халҡыбыҙҙың әхлаҡ ҡағиҙәләре, тормош фәлсәфәһе, шәхестең ил, халыҡ алдындағы ғәйәт ҙур яуаплылығы билдәләнгән. Булдыҡһыҙҙарҙы “Ат туғарып, егә белмәй, ҡыҙҙар һайлаған була” тип хурлағандар. Бик күп йырҙарҙағы һуңғы ике юл алдынан мотлаҡ рәүештә аттарҙың төрлө мәлдәренә, холоҡ-ҡылығына бәйле һүҙҙәр килгән. Йырҙың тәүге ике юлы унан һуңғы ике юлда әйтеләсәк фекергә әҙерлек була, улар араһындағы бәйләнеш, яңғыраш, ауаздашлыҡ тыуҙыра, йыш ҡына хозурлыҡ менән ауырлыҡ ҡапма-ҡаршы килә. “Эскадрон” йырын хәтерләйек. Башта ниндәй матур мәл: “Урал ғына ҡошо һай һандуғас ат менгәндә моңло һайраны”. Әммә был һиллек юҡҡа сыға, илгә ябырылған яу һулышы килеп бәрелгәндәй була: “Ҡындан алып алмас ҡылысымды Урал ташҡайына ҡайраным”. “Әрме” йырының бер строфаһы ҡурай моңо менән башлана: “Бейек кенә тауҙың башҡайында ир-егеткәй ҡурай уйнайҙыр”. Ҡурай моңо ерле юҡтан ишетелмәгән икән, артабанғы кисерештәр үтә ауыр: “Ир-егеткәй, меҫкен, һалдат булғас, ат ялына йәбешеп илайҙыр”. Кешенең ошондай ҡайғылы саҡтарын да аттар аҙ күрмәгән. Ләкин ут-дәһшәт эсендә лә башҡорт егеттәре юғалып ҡалмаған. “Порт-Артур” йырында атын ҡурпыға ебәргән һалдат бына нимә ти: “Дошман һигеҙ, беҙ өсәүбеҙ, ниңә унан ҡурҡырға?”

“Өйҙөрәкәй буйы ҡылған ялан елләп-елләп бейә бәйләргә. Өйҙөрәкәй буйы ҡулдан киткәс, ни йәм табып йәйҙәр йәйләргә?” — быныһы иле таланған, ерҙәрен алдап-юлдап яттар баҫып алған башҡорттоң һыҙланып йырлағаны. Бындай иңрәүле йырҙар ҙа аҙ түгел.

Беҙҙең йырҙар бик киң ваҡыт һәм ер араларын иңләй. Башҡорт аттары, Европа буйлап күпме илдәрҙе үтеп, Сенанан һыу эскән, сит тауҙарға күтәрелгән, сүлдәрҙә яфа сиккән, ҡыҫҡаһы, ҡайһы тарафтарҙа ғына булмаған да нимәләр генә күрмәгән. Ошондай әҫәрҙәрҙе ғалимдарҙың тарихи йырҙар тип атауы һәм шул исем менән бергә туплауы бик дөрөҫ. Ҡупселек башҡорт йырҙары тарихи ерлектә ижад ителгән. Ғөмүмән, башҡорт халҡының фекерләү үҙенсәлегенә әлеге тарихилыҡ хас. Уның тарихи хәтере әллә ҡасанғы ваҡиғаларҙы һәм шәхестәрҙе һаман да онотмай, улар хаҡында күптән донъяға тыуған йырҙар бөгөн дә йырлана. Мәҫәлән, француз яуы тураһында француз йәки рус фольклорында әҫәрҙәр тыуҙымы икән? Әгәр тыуған булһа, улар әле лә халыҡ күңелендә һаҡланғанмы? Булыуы бик икеле. Ә бына башҡорттар был тарихи ваҡиғалар тураһында әле лә йырлай.

Тағы ла бер миҫал. Егерменсе быуат башындағы рус-япон һуғышында беҙҙең илдән күп халыҡтар ҡатнашҡан. Улар араһында башҡорттар һымаҡ “Порт-Артур” тип бөгөн дә йырлағандары бармы икән?

Бөйөк Ватан һуғышында илде яҡлап бөтә милләттәр күтәрелде, ҡаһармандар дан ҡаҙанды. Уларҙың күптәре бөгөн дә халыҡ хәтерендә. Ләкин “Ат уйнатып алдан бара Шайморатов генерал” тип әле лә йырлаған башҡорттар һымаҡ башҡа милләттәр ҙә үҙҙәренең һуңғы бөйөк һуғыштағы батырҙарын бөгөн дә данлаймы?

Борон-борондан башҡорт аттары батырлыҡ һәм тоғролоҡ символы ғына түгел, йәшәү сығанағы ла, тормошто алға алып барыусы ҙур көс тә ул. Йырҙарҙа батырлыҡҡа ғына түгел, көн итеүгә, ғәҙәти көнкүрешкә бәйле ҡыҙыҡлы миҫалдар ҙа бар. Шуларҙың береһен Һамар яҡтарында яҙып алынған “Әпәт” тигән йырҙан килтерәм: “Ерән бейә менән туры бейә һауған һайын икешәр эйә. Хайран малдарымдың иткәйен әллә ниндәй дошмандар йейә”. Был йыр, моғайын, башҡорт еренә тағы ла (“Әпәт” тигән исем юҡтан түгелдер) ябырылған барымтанан һуң тыуғандыр. Әрәм булған малдарын кеше көнкүреш хәлдәренә бәйләп (бейә һауыу, ит ашау), һағынып хәтерләй.

Ғүмере буйы итен, ҡаҙыһын, ялын ашап, ҡымыҙын, һурпаһын эсеп йәшәгән, тормошоноң ныҡлы таянысы ла, шатлыҡ-кинәнесе лә булған йылҡы малын башҡорт нисек изгеләштермәһен дә уға арнап йырҙар йырламай нисек түҙһен? Уның донъяға ҡараштарында, рухи тәбиғәтендә, психологияһында ат культы нисек барлыҡҡа килмәһен?

Донъя тураһында, йәшәү, ғаилә хаҡында уйланып, башҡорттоң былай тип йырлағаны ла бар: “Был донъяҡайҙарҙың рәхәтлеге яҡшы ат менән һылыу бисәлә”. Бисәнән алда ат әйтелә. Был үҙенсәлек ҡатын-ҡыҙҙы ҡәҙерләп еткермәүҙән түгел, борондан башҡорттоң булмышына тамырланған инаныуҙан — атты изгеләштереүҙән килә. “Аҡыллы атын маҡтар, иҫәр ҡатынын маҡтар” тигән һүҙҙәрҙе лә ҡатын-ҡыҙҙы кәмһетеү тип түгел, атты электән килгән ололауҙың ни тиклем көслө булғанлығы тип аңларға кәрәк.

Атты изгеләштереү беҙҙең халыҡта ҡандан килә, быуаттар төпкөлөнән һаҡлана. Фольклорыбыҙҙа аттың магияһы төрлө яҡлап асыла. Ҡылын яндырыу була — Аҡбуҙат батыр янына осоп-елеп килеп етә. Был изге мал еле менән дошман сафтарын йыға. Көс-ғәйрәте сикһеҙ. Уның ауыҙ күбеге яраны төҙәтә. Бик боронғо ваҡыттарҙа ир-егетте аты менән ерләр булғандар.

Ҡайһы бер әкиәттәрҙә бәйән ителгәнсә, изге толпар ергә тибеп шишмә сығарған. Ат тиренең еҫенән йылан ҡурҡҡан. Шуға яланда йәки урманда ҡунғанда эргәгә эйәр-йүгән һалғандар, ятҡан урынды ҡыл арҡан менән уратҡандар. Шул саҡта йыландан ҡурҡмай тыныс йоҡлағандар. Был ғәҙәт әле лә һаҡланған.

Беҙҙең изге мәсеттәребеҙҙең манараһын биҙәгән ай ҙа асылда ат дағаһы ул тип аңлатыуҙарҙы уҡығаным бар.

Бәлә-ҡазанан һаҡланыр өсөн өй янындағы ҡаҙыҡҡа йылҡы малының баш һөйәген элеп ҡуйыу йолаһы яңы заманға тиклем һаҡланған. Уның һөйәге лә ҡәҙерле булған. Беҙ бәләкәй саҡта аттың ыҡсым ғына быуын һөйәге менән бәрешеп, саҡ (саға) уйнай торғайныҡ. Шул һөйәктәрҙе иң күп йыйған малайға башҡаларыбыҙҙың көнләшеп ҡарағаны хәтерҙә.

Беҙ үҙебеҙ ҙә белмәҫтән атҡа бәйле күренештәр менән фекер йөрөтәбеҙ. 1979 йылда мин Ғәзим Шафиҡовтың ҡырҡ йәшенә арнап “Эйәр” тигән шиғыр яҙғайным. Ул шиғыр “Һәр таң һайын йөрәкһетә беҙҙе Уралтауҙың эйәр-һырттары” тигән юлдар менән бөтә. Эйәр-һырт тигәнем үҙемсә образлыраҡ әйтергә тырышыуымдан тыуғайны. Урал һырттарында, ысынлап та, эйәргә оҡшап торған урындар бар бит. Күгәрсен районына йыш сәфәрҙәремдең береһендә Бикбулат ауылында тәү ҡат булғайным. Унда Эйәртау бар икән. Мине уның үҙенән дә бигерәк исеме хайран итте. Баяғы шиғырымды яҙғанда мин Эйәртауҙың барлығын белмәй инем. Аҙаҡ тағы ла шуны белдем: ике башын уйһыулыҡ бүлгән Эльбрусты ярһыу аттың тояғы икегә ярған, имеш. Был тауҙы балҡарҙар Менгетау тиҙәр икән. Башҡортса әйтһәк, Эйәртау була. Былдай тап килеүҙәр һис кенә лә осраҡлы түгел. Тирә-яғындағыны һәр халыҡ үҙенең тормош-көнкүрешенә бәйле исемдәр менән атай.

Әле һүҙ күберәк эпостарыбыҙ, ҡобайырҙарыбыҙ, оҙон йырҙарыбыҙ тураһында барҙы. Шиғри жанрҙарыбыҙҙың бик үҙенсәлеклеһе, тик башҡорт фольклорына ғына хас йырҙар-сеңләүҙәр хаҡында ла әйтеп үткем килә. Ҡыҙ баланың тыуған йорттан ғүмерлеккә айырылып, кейәүгә оҙатылғандағы кисерештәрен башҡа халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадында ла күрергә мөмкин. Ләкин уларҙың башҡорт сеңләүҙәре һымаҡ төҙөк жанр булып нығынғанын табыуы ҡыйын.

Сеңләү йолаһы беҙҙә һуңғы ваҡыттарға тиклем һаҡланып килде. Туйҙар ваҡытында ҡыҙҙың ошолай үҙенсәлекле йыр йырлап хушлашыуы һаҡланған төбәктәр бәлки әле лә барҙыр.

Кейәүгә оҙатылыр сағында ҡыҙ иң элек атаһына ҡарап сеңләй: “Атаҡайымдың аттары һыуҙан ғына сыҡҡан балыҡтай. Атаҡайымдың биргән ере яныП та торған тамуҡтай”, “Ҡапҡа төбөнә тай туҡтаған, асып ебәр, атаҡай, ҡапҡаңды. Биргән малдарын кире ебәр, алып ҡал, атаҡай, балаңды”. Ҡыҙ әсәһенә лә сеңләп өндәшә: “Ҡылсылдама, тимен, турыҡай, ҡыл дилбегәңде

өҙөрһөң. Илама ла, әсәйем, илама, үҙегеҙ биргәс, түҙерһең". Сеңләүсе ағаһы менән еңгәһен дә өлөшһөҙ ҡалдырмай: "Йылҡынан була ҡола тай, һыйырҙан тыуа танаҡай. Туғаныңды утка һалдылар, йәл түгелме һиңә, ағаҡай?", "Атыңа бесән һал, еңгәкәй, ауыҙлыҡтарын ал, еңгәкәй. Башыма яулыҡ япҡансы, татлы йәнемде ал, еңгәкәй".

Ҡеше күңелен шул тиклем нескә күрһәткән миҫалдарҙы күп килтерге килә, әммә мәҡәләнең мөмкинлектәре сикләнгән. Был китапты ҡулына алған кеше сеңләгәндәге ҡыҙҙың кисерештәрен һуңғы бүлектәге үрнәктәрҙе уҡып, тулыраҡ белер. Туйҙы яҡшы үткәрер, ҡыҙҙы оҙатыр өсөн аттарҙың иң яҡшылары егелгән. Сеңләүҙәрҙең күпселек строфаларында сеңләүсе ҡыҙ аттарға өндәшмәй, уларҙы телгә алмай ҡалмай. Сеңләүҙәр тураһында һөйләгәндә уларҙың мөһим бер үҙенсәлеге хаҡында ентекләберәк әйтке килә. Ортодаксаль, ҡайһы саҡта хатта фанатик мосолман йәмғиәттәре менән сағыштырғанда башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының тормошо күпкә иркенерәк булған. Улар һыбай йөрөгәндәр, яу ваҡытында ирҙәре менән хатта Париждарға барып еткәндәр. Билдәле йырҙы үҙгәртеп әйтһәк, ҡайҙа ғына булмаған да ниҙәр генә күрмәгән ҡатын-ҡыҙ башы.

Ләкин киләсәктә илде һаҡлар, хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлар батырҙарҙы әсәләр үҫтергән, уларҙың күңелендә халыҡтың тормош аҡылы, йәшәү ҡағиҙәләре, күп һынауҙарҙы үткән тәрбиә мәктәбе нығыраҡ һаҡланған. Әлбиттә, уларҙың бик ныҡ рәнйетелгән, хатта донъянан төңөлөр саҡтары ла аҙ булмаған.

Ҡыҙҙарҙың аһ-зары, мөлдөрәмә тулған күҙ йәштәре күпме сеңләүҙәрҙән йөрәккә түгелә. Һүҙҙәре күңелде яралай. Ләкин кейәүгә оҙатылған ҡыҙҙарҙың барыһы ла бәхетһеҙ булмаған, әлбиттә. Уларҙың туйҙы шатланып, көтөп алғандары ла туғандарынан айырылғанда йоланы үтәп, барыбер сеңләргә тейеш. Сеңләү ваҡытында ҡыҙға тулыһынса иркенлек бирелгән: ул атаһына ла, әсәһенә лә әйтер һүҙен әйтеп ҡалған. Көсләп кейәүгә бирелгәндәре үҙенең рәнйеү һүҙҙәрен, аһ-зарын асыҡтан-асыҡ әйткән. Бәхетлеләре йола буйынса сеңләгән. Нисек кенә булмаһын, сеңләүҙәр башҡорт ҡыҙҙарының хоҡуҡтарын арттырған, улар ҡурҡмайынса һүҙ әйтеп ҡала алған.

* * *

Элек-электән килгән ҡунаҡтың доғаһы менән өйгә доға килә тигәндәр. Йылҡы йылы бәрәкәтле, уңышлы йыл тип ышанғандар. Хыянатһыҙ кешене эт һымаҡ тоғро тигәндәр. Шул уҡ ваҡытта бик асыуҙары килгән саҡта эт тип әрләйҙәр ҙә бит. Ә бына берәйһенә асыуы килгәндә уны ат тип һүкмәйҙәр. Эт хаҡында халыҡтың бик үк йырлап барғаны ишетелмәй. Ә бына атты данлау, уның менән юлдаш булыу, бергә шатланыу, ауырлыҡтарҙы бергә йырып сығыу тураһында башҡорт йырҙарында йөҙәр ҡат ҡына түгел, меңәр тапҡырҙар әйтелгән. Беҙ Урал батыр вариҫтары икәнлегебеҙҙе, аттарыбыҙҙың Аҡбуҙат тоҡомонан булғанлығын онотмаһаҡ, тарихтағы тамырҙарыбыҙҙы тәрәндәнерәк барлаһаҡ, киләсәктә атлар юлдарыбыҙҙы хәстәрлерәк байҡаһаҡ ине.

*Март, 2015 й.*

# ЭПОСТАРҘАН ӨҘӨКТӘР

## Урал батыр

Һомай майҙан йыйған, ти,
Аҡбуҙын саҡырған, ти.
Күк күкрәп, шау килеп,
Ерҙә дауыл ҡуптарып,
Тау-таш, ҡая аҡтарып,
Бөтә йәнгә шом һалып;
Йондоҙ һымаҡ атылып,
Аҡбуҙ толпар атлығып,
Күктән килеп төшкән, ти,
Һомай һылыу алдына
Килеп башын эйгән, ти.
Аҡбуҙ шунда туҡтаған,
Бөтә майҙан һоҡланған:
Һыртына эйәр һалынған, ти,
Эйәренең башына
Алмас ҡылыс тағылған;
Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын;
Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,
Ялын ҡыҙҙай тараған;
Башкүнәктәй танаулы,
Һарымһаҡтай аҫаулы;
Ҡарсыға түш, тар бөйөр,
Еңел, текә тояҡлы;
Ҡуян күҙле, баҡыр күҙ,
Ҡыҫыр йылан тамаҡлы;
Урайы ҡуш, яңағы ас,
Муйындары бер ҡолас,
Ҡыйғыр, бөркөт ҡабаҡлы;
Текә баҫып, баш ташлап,
Йылғыр атлап бышҡырыр;
Ҡолаҡтарын ҡайсылап,
Алан-йолан ҡаранып;
Алғыр бүре күҙендәй,
Күҙ бәбәген сылатыр;
Ауыҙлыҡ сәйнәп, ярһыуҙан
Ауыҙҙарын күпсетер;
Елһә, ҡоштай елпенеп,
Артында саң уйнатыр;
Осраған бер кешене
Хайран итер, уйлатыр, —
Бына ошондай Аҡбуҙ ул,
Күҙ күрмәгән ят буҙ ул.

## Аҡбуҙат

### Беренсе өҙөк

Аҡ батша атайымдың
Һөйөп мենгән аты бар —
Йылҡы малдың ҡото бар.
Ут юҡта ул ут бирер,
Һыу юҡта ул һыу бирер,
Осһоҙ-ҡырыйһыҙ диңгеҙҙән
Осоп сығыр ҡош булыр;
Ялы ап-аҡ ебәктәй,
Төҫө талғыр буҙ ғына,
Йоморо ғына тояҡты
Баҫып тора беҙ генә;
Ҡамыш ҡолаҡ, баҡыр күҙ,
Бәбәге лә аҡ ҡына;
Мундаһы бейек, тар бөйөр,
Суртан тәнле, ныҡ ҡына;
Ҡарсыға морон, киң танау,
Ҡуш аҙаулы, һоҫа теш,
Осло эйәк, ас яңаҡ,
Ҡуш урайлы, — шул ғына.
Шул буҙ атты бирәйем,
Уралыңда һин үҙең,
Һыу илемдә мин үҙем
Бәхетле ғүмер итәйем.

### Икенсе өҙөк

Һис түҙемем ҡалманы.
Яҡын барҙым янына,
Егет көләс йөҙлө ине,
Текләберәк ҡараһам,
Баяғы егет үҙе ине.
Яуға сапҡан батырҙай,
Алтын-көмөш эйәрле,
Болғар тартҡы, айыллы,
Туҡымдары ынйылы,
Тибенгеһе сәмсәле,
Болан тире таралғы;
Өҙәңгеһе көмөштән,
Эйәр ҡашы алтындан,
Семәрләнгән аҡыҡтан;

Йылан ҡамсы ҡашында,
Ҡанъяғала ҡуржыны,
Ҡырпыуҙары сәхтиән,
Ҡумелдерек түшендә,
Арт һанында — ҡойошҡан;
Ебәк сыбар нуҡталы,
Ҡуш ауыҙлыҡ йүгәнле,
Теҙгенен ҡашҡа шаҡарған;
Ҡырас яллы, төк сәсә,
Суртан һыртлы, тар бөйөр,
Ҡубаға һебә, ҡуян бот,
Текә тояҡ, ас яңаҡ,
Ҡамыш ҡолаҡ, киң танау,
Ҡарсыға түш, баҡыр күҙ,
Әтәс муйын, ҡуш урай,
Суңҡа эйәк, ҡымты ирен
Аҡбуҙ толпар янында.
Үҙе төҫкә ат шулай,
Ҡәңәш биреп егеткә,
Тап әҙәмдәй һүҙ һөйләй.

Ана мине шул егет
Азат итте һарайҙан.
Алам һине, тимәне,
Намыҫыма теймәне,
Юлға төшөрөп ебәрҙе,
Саҡырһам да һарайға,
Миңә үҙе килмәне.

**Өсөнсө өҙөк**

Шул саҡта күлдән ер ҡаплаған ҡола йылҡы сыҡҡан, ти. Һәүбән быларҙың бөтәһен дә ат-тунһыҙ халыҡҡа таратып биргән. Үҙҙәре, Нәркәс менән икәүләп, Аҡбуҙатты менеп, Һәүбән иленә ҡайтып киткән, ти.

**Дүртенсе өҙөк**

Күл шаулатып, һыу ярып,
Ерҙә дауыл ҡуптарып,
Аҡбуҙ сығыр — мал ҡото,
Бөтә малдан һуң ҡалып, —
Сабыр итеп, шуны көт.
Маңлайын һыйпаһаң,
Телгә килер Аҡбуҙ ат.
Ни теләһәң, шуны үтәр,
Йүнгә килер Аҡбуҙ ат.
Ике бөртө ҡыл үртә —
Сабып килер Аҡбуҙ ат,
Теләгән бер ереңә
Алып елер Аҡбуҙ ат.
Бөтә малың бөтһә лә,
Аҡбуҙ ҡалыр яныңда,
Юлдаш булыр юлыңда.
Батыр булыр яуыңда...

**Бишенсе өҙөк**

Айырманым күлеңдән,
Һаҡлап ҡалдым үлемдән:
Тояғы ергә теймәгән,
Ел дә ҡыуып етмәгән,
Ташланып яу сапҡанда
Урман, тау-таш тимәгән,
Өҫтөндәге батырын
Дошманына бирмәгән,
Бабам Урал батырҙың
Аҡбуҙ атын бир, һылыу!
Сапҡан саҡта таш ярған,
Йәшендәй ут сығарған,
Урал батыр ҡылысын
Бирәм, тигән һүҙең бар,
Шул ҡылысты бир, һылыу,
Үҙ һүҙеңдә тор, һылыу!

**Алтынсы өҙөк**

Урал батыр ҡулында
Илдәр гиҙгән был ҡылыс;
Иҙел менән Яйыҡҡа
Үҙән йырған был ҡылыс;
Күл төбөндә күгәрмәй
Мең йыл ятҡан был ҡылыс.
Аҫтындағы Аҡбуҙ ат —
Урал батыр аты ул;
Алдында урман торғанда,
Урманын да, һыуын да
Ырғып үткән буҙ ат ул.
Болотҡа еткән тауҙарҙы
Һикереп ашҡан Аҡбуҙ ат;
Тояғы тейгән урындан
Күл сығарған Аҡбуҙ ат;
Елеп үткән еренән
Тау сығарған Аҡбуҙ ат...

## Заятүләк менән Һыуһылыу

*Заятүләк:*
— Һөйөп һунар аулаған
Балҡантауым һағындым;
Талда бәйле ҡаҡланған
Күк толпарым һағындым.

Эйәр ҡашында талыҡҡан
Шоңҡар ҡошом һағындым;
Улар һаҡлап тилмергән
Һәпәләк этем һағындым.

Ай, һылыуым, йән һылыу,
Өс янына дүрт булдың,
Йөрәгемдә һарҡытып,
Дүрт янына биш булдың.
Башым ташҡа орһам да,
Һөйәге ҡалыр йән булмаҫ;
Бишге уртаҡ бүлһәм дә,
Күңелем толҡа табалмаҫ,
Өстө һағынып ҡайтһам да,
Улар үлһә, йәм булмаҫ.

## Аҡһаҡ ҡола

### Беренсе өҙөк

Сысҡан һыртлы ҡола бейә,
Шүлгән затлы ҡола бейә,
Йоморо тояҡ ҡола бейә,
Тырпаҡ ҡолаҡ ҡола бейә
Шүлгән күлдән сығып килә,
Күл төбөнән сығып килә
Сысҡан һыртлы ҡолон менән,
Шүлгән затлы ҡолон менән,
Йоморо ояҡ, тырпаҡ ҡолаҡ
Матур һынлы ҡолон менән.

### Икенсе өҙөк

Алтмыш йылҡы бер китте, ти,
Етмеш йылҡы бер китте.
Алтмыш йылҡы араһында
Атлығып торған алты ат юҡ:
Айыл етмәҫ ала ат юҡ,
Ҡойошҡан етмәҫ ҡола ат юҡ,
Ҡарлуғас ботло ҡара ат юҡ,
Күгәрсен түш күк ат юҡ,
Сыбай ҡашҡа кир ат юҡ,
Йондоҙ ҡашҡа һары ат юҡ, ти.

Етмеш йылҡы араһында
Елкенеп торған ете ат юҡ:
Ялбыр яллы ерән юҡ,
Нескә бөйөр дүнән юҡ,
Йүгән һалмаҫ юрға юҡ,
Йоморо тояҡ туры юҡ,
Мундаһы бейек бурыл юҡ,
Тырпаҡ ҡолаҡ ҡонан юҡ,
Йәйек ҡойороҡ бейә юҡ.

Алтмыш йылҡы эсендә
Билге һалған алты ат юҡ,
Етмеш йылҡы эсендә
Инле ҡолаҡ ете ат юҡ,
Ялы ергә һөйрәлгән,
Аҡһаҡ ҡола — мал ҡото,
Ул да булһа ҡасып киткән,
Яланда юҡ, йортта юҡ.

### Өсөнсө өҙөк

— Ай, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Атымдан мин төшөрмөн,
Һөҙһәң, ҡымыҙ эсермен;
Аҡ сатырҙың эсендә
Аҡ сәпсектәй уйнарбыҙ.
Уйпат-уйпат ерҙәрҙә
Тибен тибер ҡолонсаҡ,
Сәсмәүҙәрен сылтыратып,
Бейә һауыр киленсәк...
Юғалттым мин йылҡымды —
Билдәленән бишәү юҡ:
Тубығы тимгел туры юҡ,
Сыңғыҙ ерән бейә юҡ,
Сысҡан һыртлы ҡола юҡ,
Сыбар-ала тайы юҡ,
Ялы ергә һөйрәлгән
Аҡһаҡ ҡола айғыр юҡ.
Ары ла саптым, тапманым,
Бире лә саптым, тапманым;
Урал тауын гиҙәмен,
Тапмайынса ҡайтмамын.

### Ҡара юрға

**Беренсе өҙөк**

Егет, һаман ялынып:
— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам,
Йоморо-йоморо тояғыңды
Дағалармын, юрғам,
Ҡикел сәсле маңлайыңды
Көмөшләрмен, юрғам, —
Зифа буйлы шул һылыуҙы
Алып килсе, юрғам,
Алып килсе, юрғам.
Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам!

**Икенсе өҙөк**

— Һай, Ҡара юрғам,
Һай, Ҡара юрғам,
Ялбыр-йолбор ялдарыңды
Көмөшләрмен, юрғам,
Тубыр-тубыр тояғыңды
Дағалармын, юрғам,
Өҫтөңдәге һылыуыңды
Төшөрһәнә, юрғам,
Төшөрһәнә, юрғам.

### Ҡуңыр буға

— Уралына артылып,
Теҙәкләнеп, тартылып,
Ергә терәп аяғын,
Тау-ҡаяға таянып;
Ужарланып дошманға,
Аҡбуҙында елдереп,
Саптарында сабышып,
Йән аямай алышып,
Яу ҡыуып, һөрән һалып,
Болот һымаҡ ҡуҙғалып,
Ҡулындағы ҡылысын
Ян-яғына һелтәнгән,
Дошманына уҡталған...

...Хас дошманды баҫтырып,
Килгән юлын таптырып,
Илдән ҡыуып сығарған;
Ертыштан да уҙғарған,
Уҙғарып, ау, уҙғарған.

## ҠОБАЙЫРҘАРҘАН ӨҘӨКТӘР

### Ай Уралым, Уралым

Сыңғыр-сыңғыр сыңраған
Йылҡыһы күп Урал тау,
Мөңөр-мөңөр мөңрәгән
Һыйыры күп Урал тау,
Ҡәкре ҡойроҡ, йылтыр күҙ
Бүреһе күп Урал тау,
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп Урал тау,
Майлап ҡуйған ҡайыштай
Йыланы күп Урал тау,
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Урал тау,
Ҡыҙ балалай биҙәнгән,
Төлкөһө күп Урал тау,
Ояларға урыны мул,
Ҡоштары күп Урал тау,
Балығы аттай дулаған,
Баҡаһы ҡуйҙай һулаған,
Һыуы ярына һыймаған,
Йылғаһы күп Урал тау.
Балтырғаны беләктәй,
Һарнаһы ҡурай еләктәй,
Туғайҙары түшәктәй,
Талы, муйылы ҡурсаҡтай,
Сәскәләре мең төҫлө,
Иҫертерлек хуш еҫле,
Йылҡылары сыңырлап,
Һыйырҙары мөңөрәп,
Ҡуй-һарығы ҡуңырап,
Көтөү-көтөү йөрөр ер;
Ятып ҡалған бер бәрәс
Йөҙ ҡуй булып үрсер ер,
Тороп ҡалған яңғыҙ тай
Өйөр булып йөрөр ер, —
Атам кейәү булған ер,
Әсәм килен булған ер.
Урал тигән илем бар
Тулы ҡойроҡ, ялбыр ял,
Өйөр һаҡлар айғырлы, —
Бына шундай Уралым.
Урал тигән илем бар,
Илем барҙа — көнөм бар.

### Бейек тауҙың үлгәне

Ханға бирһәң ҡулыңды,
Ханға түшәк йәйерһең;
Төшһәң менгән атыңдан,
Ханға башың эйерһең.
Ҡылысың тыҡһаң ҡыныңа,
Хандың ҡоло булырһың.
Яу килгәндә өнһөҙ булһаң,
Хандың боло булырһың.
Илдең нурлы булғаны —
Илдә батыр тыуғаны;
Илдең моңло булғаны —
Дошман килеп тулғаны.
Айбарлаған батырҙар
Яуға барыр яу булып,
Тигеҙ ерҙә тау булып;
Сергеһенән ҡан үтмәй,
Батыр булып дан тотмай,
Аттан эйәр алмаҫтар,
Ҡынға ҡылыс һалмаҫтар ау,
Ҡынға ҡылыс һалмаҫтар.

### Яман яҡшы була алмаҫ

Ҡурҡаҡ булмаҫ ир-батыр,
Өркәк булмаҫ ир-батыр;
Ир-егеттең эсендә
Эйәрле, йүгәнле ат ятыр.

### Бур байыҡмаҫ

Айыу һуҡҡан тун кейер,
Уңған бала уҡ юныр;
Атҡа менгән ил гиҙәр,
Яҡшы кеше ил биҙәр ау,
Яҡшы кеше ил биҙәр.

### Үҙән күрке тал булыр

Үҙән күрке тал булыр,
Айғыр күрке ял булыр,
(Ышанмаһаң, талың киҫ, —
Яп-яланғас сай булыр;
Ялын ҡырҡһаң айғырҙың,
Бер алама тай булыр).

### Уралып ятҡан Уралда

Уралып ятҡан Уралда:
Аҡбуҙ аттай ат менеп,
Ыласындай тиҙ елеп;
Уҡ-һаҙағын ҡулға алып,
Ҡәрәк әйберен юлға алып,
Ил-йорт менән хушлашып,
Булырҙай менән дуҫлашып,
Булмаҫтай менән үсләшеп,
Яуға ҡаршы яу сабыр
Батыр-батыр ирҙәр бар.

### Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Сәсән килде алдыңа;
Йүгерек аттай йөрәкһеп,
Сәсән ултыра алдыңда.
Ҡолонсаҡтай бай балаһы
Ярлы булмаҫ тимәгеҙ,
Ҡара ҡаҙандан һыу эскән —
Ул аш йеймәҫ тимәгеҙ;
Ат күрмәгән ат күрһә,
Сабып үлтерер тимәгеҙ;
Тун кеймәгән тун кейһә,
Ҡағып бөтөрөр тимәгеҙ.

### Ҡурҡаҡ ирҙән ни сығар?

Һай тим, субар тим, субар,
Һай тим, субар тим, субар.
Тибенгән аттан тир сығар,
Аҡ мамыҡтан буҙ сығар.
Аҡыллынан һүҙ сығар,
Аҡылһыҙҙан күҙ сығар ау,
Аҡылһыҙҙан күҙ сығар.
Һай тим, субар тим, субар,
Һай тим, субар тим, субар.
Ҡурайсынан көй сығар,
Ҡурҡаҡ ирҙән ни сығар?

**Салауат батыр**

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Дошман менән алышҡанда
Ил эсендә бер ине;
Халҡы өсөн көн ине,
Дошман өсөн төн ине,
Дошман өсөн төн ине.

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яурынына уҡ тейһә, —
Себен тешләй, тир ине;
Ҡукрәгенән ҡан сыҡһа, —
Тирем сыға, тир ине ау,
Тирем сыға, тир ине.

## ИСЕМЛЕ ЙЫРҘАРҘАН ӨҘӨКТӘР

**Урал**

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алып
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

**Йыуасалы**

Урал тауҡайҙарын кире артылһам,
Әллә төшөр инем Үмергә.
Ат ҡушаҡлап сабып, етеп булмай
Үмеркәйҙә үткән ғүмергә.

**Башҡорт ере**

Атҡайҙарға атланып, яуҙар сабып,
Ил һаҡлаған беҙҙең аталар.
Васыят та булып ҡалған ерҙе
Мәғрифәтһеҙ ирҙәр һаталар.

**Йәмәлекәй тауы**

Йәмәлекәй тауҙың итәгендә
Йөрөмәҫ инде йылҡы көтөүе.
Йән биреүкәйҙәрҙән ауыр булды
Йәмәлекәй тауҙың китеүе.

**Ыспрауник**

Бәғәрешкәй тауҙың һырты бейек,
Ерәнсәкәй атым менә алмай.
Тотоп ҡына Себер ебәрҙеләр
Дошмандарым мине күрә алмай.

**Сәҙе буйы**

Сәҙе генә буйы, ай, аҡ татыр,
Ат аяҡкайҙарын аҡһатыр.
Күгәреп тә ятҡан Сәҙе буйы,
Беҙҙәр киткәс, һиндә кем ятыр.

**Алтын Урҙа**

Турсанайҙы ектем, ай, дыулатып,
Сығып та киттем Урал буйлатып.
Бара ла торғас, бер йырлап ебәрҙем,
Үҙ күңелемде үҙем йыуатып.

**Тәфтиләү**

Аҫтындағы эйәр атҡа тейер,
Эйәре лә белмәҫ, ат белә.
Тәфтиләүҙең ҡылған, ай, ҡәһәрен
Үҙе белмәһә лә, ил белә.

**Салауат батыр**

Күк күкрәйҙер, йәшен йәшнәйҙер,
Салауаттың аты кешнәйҙер,
Салауат та батыр яу ҡырында
Иҫ китерлек эштәр эшләйҙер.

Өйөр генә йылҡы араһында
Алалары бар ҙа, буҙы юҡ,
Яуға ғына киткән Салауаттың
Атҡынайы ҡайтты, үҙе юҡ.

Ҡараңғы ла төндә юл яҡтыртҡан —
Салауат менгән кирҙең ҡашҡаһы,
Салауатҡай китеп, тыумаҫ тимәң
Арыҫландай ирҙең башҡаһы.

Салауат батыр килә ат өҫтөндә,
Бүгәс ғәскәренә баш булып.
Дошмандарҙан улар һис ҡурҡмайҙар,
Йөрәктәре ҡатҡан таш булып.

Ҡыҙыл ғына турат ҡойроғо
Күтәреп кенә сапҡан тыу кеүек.
Салауат менән, ай, Юлайҙың
Күҙ йәштәре ағыр һыу кеүек.

**Ҡара ат**

Ынтыл ғына ынтыл, әй, ҡара атым,
Елбер генә елбер ял өсөн.
Аяма ла йәнең, әй, ҡара атым,
Йөҙ егерме башҡорт ҡаны өсөн.

**Француз көйө**

Атҡа ғына мендек, ай, үҙебеҙ,
Ҡалманымы әйтер һүҙегеҙ.
Ҡалһа ҡалһын әйтер һүҙҙәрегеҙ,
Сабырһыҙ ҙа булмаң үҙегеҙ.

**Ирәмәл**

Дағалатып атты, һай, беҙ мендек,
Мәскәү генә юлы тау булһа.
Тыуған да ғына илгә беҙ ҡайтырбыҙ,
Ғәзиз баштарыбыҙ һау булһа.

**Ерән ҡашҡа**

Йәйләүҙәрҙе ташлап, ҡорал алып,
Беҙ китәбеҙ, беҙ китәбеҙ менеп тә аттарға.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Алдан елер малҡайым,
Эйәрендә егете барҙа
Бойоғоу белмәҫ малҡайым.
Эй-й... бойоғоу белмәҫ малҡайым.
Иҫән генә тороғоҙ, беҙ китәбеҙ,
Йыш яҙығыҙ, йыш яҙығыҙ
Яуап та хаттарға.
Ерән ҡашҡа атҡайым да,
Юл ташламаҫ малҡайым.
Биленән эйәр төшмәһә лә,
Төҫ ташламаҫ атҡайым.
Эй-й... төҫ ташламаҫ атҡайым.

**Һай, илкәйем**

Уралҡайым беҙҙе, ай, үҫтерҙең
Буйҙарында атта уйнатып,
Һай, илкәйем, тыуған еркәйем.
Бүре, айыуҙарҙай дошманды ла
Беҙ ҡайтырбыҙ еңеп, ҡыйратып,
Һай, илкәйем, тыуған еркәйем.

**Әхмәт байыҡ**

Французҡайҙарҙың, ай, ерҙәре,
Түңәрәк, түңәрәк булыр күлдәре.
Яҡшы атҡа менеп, һөңгө тотоп,
Батыр башҡорт сығыр элгәре.

**Ҡаһым түрә**

Ҡаһым түрә менгән һор(о) юрғаның,
вай кем,
Маңлайында булыр урайы.
Ҡаһым түрә фарман биргән саҡта,
вай кем,
Һул ҡулында булыр ҡурайы.
Ҡаһым түрә менгән һоро юрғаның,
вай кем,
Һорашып та майор алалмай.
Өс йөҙ генә кеше — бик күп кеше,
вай кем,
Илашып та ҡәбер ҡаҙалмай.

**Абдулла ахун**

Ҡисә генә ахун ине,
Ниңә ситкә ауышҡан?
Ырымбурға бара-бара
Түрәләргә танышҡан.
Башындағы аҡ селләһен
Аҡ картуска алышҡан.
Абдулла ахун кантон булғас,
Ҡолаҡ тынмай тауыштан.
Абдулла ахун түрәләргә
Бик ярарға тырышҡан.
Пар ат егеп, кеше талап,
Мул-мул малдар йыйышҡан.

**Төхфәт кантон**

Урай ғына урай ат сабырға
Сөнгөл ере кеүек ер ҡайҙа?
Сыбыҡ менән ҡағыҙ ҡулдарында,
Төхфәт кеүек яуыз ир ҡайҙа?

**Бүзекәй кантон**

Әүеш кенә күлдең, ай, буйында
Бүзекәев кантон аттары.
Бүзекәев кантон вафат тигәс,
Үкһеп илай ауыл ҡарттары.

**Әлмөхәмәт кантон**

Э-й... Әлмөхәмәт менгән тураҡай
Ел ҡыялатып осҡан да ҡош кеүек.
Э-й... Әлмөхәмәт менән бер һөйләшеү
Таң алдынан күргән төш кеүек.

**Абдрахман**

Унар ғына һумлыҡ ун аҡыҡлы
Эйәрең булыр, егет, ат булһа,
Яҡын күргән дуҫтан яманы юҡ,
Ауыр саҡта һиңә ят булһа.

**Сибай**

Йәшел генә сана, зәңгәр дуға
Ектерһәнә, Фатимам, туратҡа.
Атайсалға ҡайтып кантон булһам,
Ирешер инем, Фатимам, моратҡа.

**Солтангәрәй кантон**

Солтангәрәй кантон ат эйәрләй,
Ырымбурға ғына ҡаратып,
Солтангәрәй кантон вафат булды,
Өс йөҙ алтмыш йәтим илатып.

**Түрәкәй**

Түрә лә генә килә, түрә килә, тимен,
Һай, түрәкәйгенәһе,
Килгән түрәләрҙән ҡаҡшаныҡ.
Яуыз түрәләрҙе ҡуя икән, тимен,
Һай, түрәкәйгенәһе,
Рәсәй генә тигән батшалыҡ.

**Ҡарауанһарай**

Айҡай ҙа ғына сайҡай, таштар вата,
Һай кем, таштар вата,
Ҡарауан да ғына һарай, ай, һалырға,
Һай кем, ай, далала.
Торлаҡ ҡына булыр, яуҙан ҡайтһа,
Һай кем, яуҙан ҡайтһа,
Атлы ла ғына яуға, ай, ятырға,
Һай кем, ай, ҡалала.

**Буранбай**

Буранбайҙың менгән ҡашҡа аты
Саҡрым-саҡрым бармай баш ташлай.
Түрә тигәндәргә ышанмағыҙ,
Себер ебәреп үк башты ашай.

**Бөҙрә тал**

Ҡир атымды менеп, илдәр гиҙеп,
Тағы ҡайттым Тыуған илем тип.
Бөҙрә тал,
Мин меҫкенде ҡыҙған, ҡуйыныңа ал.
Илдән генә киткән мине ҡыҙған,
Ҡолас йәйеп алсы, “балам”, тип.
Бөҙрә тал,
Мин меҫкенде ҡыҙған, ҡуйыныңа ал.

**Бәхтиәр**

Ялан ғына ерҙең, ай, үҙәнен,
Ат ярата сәскә үләнен.
Күрә алмай дошман көн күргәнде,
Яратыр ине ятып үлгәнде.

**Бейеш батыр**

Күк атҡайым ектем тәртәгә,
Ҡаралары ҡалды кәртәлә.
Уңлы ғына һуңлы ҡашым тарта,
Ниҙәр генә булыр иртәгә.

Һор юрғаҡай менеп, елеп үттем
Баяр ғына баҫҡан ерҙәрҙе.
Оғро ғына тиеп хурламағыҙ
Ирәндеккә ҡаҫҡан ирҙәрҙе.

**Шаһибәрәк**

Урал тауҡайының, ай, ҡаяһы
Айыуҙарға төйәк, миңә юҡ.
Атҡайҙарға билдә иң тамғаһы,
Кешеләргә исем, миңә юҡ.

**Йүркә Юныс**

Арҡа еркәйҙәрҙән елеп үттем
Ҡыҙыл туры, бурыл ат менән.
Быйыл ғына йәйҙе мин үткәрҙем
Етмеш ете төрлө дәрт менән.

Ике лә генә ерән, парҙан көрән,
Елеп кенә бара юл менән.
Маңлайыңа яҙған хаҡ яҙмышты
Юйып ҡына булмай ҡул менән.

**Ғәҙебәк Насыр**

Ғәҙебәк Насыр менгән ҡара юрға
Маңлай сәскәйҙәрен йыя алмай.
Ғәҙебәк Насыр яуап биргән саҡта,
Губернатор-майор түҙә алмай.

Ерәнсәй ҙә атым, һай, дүнәнем,
Ятып ҡына ҡалды йүгәнем.
Минең генә тотҡон булыуымды,
Белде микән Хисам туғаным.

**Хажеғәле**

Бөгөлөп кенә һығылып үҫә икән
Һыу буйҡайының талдары.
Хажеғәле китеп, артыр микән,
Ильяс байҙың йылҡы малдары.

**Заһиҙулла**

Иртә менән тороп мин ҡараһам,
Ун ике һыбай килә саптырып.
Имгәкләп тә барып күлгә төштөм,
Йәш үләнкәйҙәрҙе сыптырып.

Саптырып та килеп ат бәйләнем
Әйҙе генә буйы сауылға.
Уф алла ла тиһәм иренем көйә
Күкрәгемдән сыҡҡан ялҡынға.

**Ирәле**

Ирәле лә еккән пар күк ала,
Башҡайҙары уйнай дуғала.
Йыраҡ ҡына илгә сәфәрләндем,
Туғандарым торһон доғала.

**Ғүмәрев**
Ғүмәревкәй үҙе, һай, ир ине,
Һөйөп менгән аты кир ине.
Тамъян ғына түгел, Тиләүҙә юҡ,
Ғүмәревкәй аҫыл ир ине.

**Сәйетхужа**
Ҡуяҙанҡай күлдең, ай, буйында
Ат бәйләргә урын уңайы.
Ғәзиз генә башым посуд булды
Ун алты ла йәшем тулайы.

**Сәләй**
Менгән генә атым, ай, күк сыбар,
Аҡ сергәләр һалһаң, тир сығыр.
Дуҫ-иштәрем бар, тип инанмайым,
Шул дуҫ-иштәреңдән сер сығыр.

**Йосоп егет**
Иртән генә тороп, бер ҡараһам,
Туғайлыҡта йылҡы юшайҙыр,
Йырлаһым да килеп йырламайым,
Йыр йырлаһам, эсем бушайҙыр.

Егет кенә булһаң, һин егет бул,
Ҡөмөш һалдыр ҡайыш йүгәнгә.
Егет кенә кеше уфтанмаҫ ул
Ҡайғы-хәсрәт күреп йөрөгәнгә.

**Сираев**
Өйөрҙәргә һалған бурыл айғыр
Өйөрҙәрен алып ятһа ине.
Әсир булып ятҡан шул Сираев
Манифест та булып ҡайтһа ине.

**Шафиҡ**
Алтын ғына эйәр, атҡа тейәр,
Эйәләре белмәҫ, ат белер.
Башҡайыңа ауыр эштәр төшһә,
Үҙ туғаның белмәҫ, ят белер.

**Һанаҡа**
Аҡъял да ғына саптар, ай, атымды,
Әпсендәре юҡ тип үк һатмағыҙ.
Минән дә генә ҡалған ир баланы,
Аталары юҡ тип ҡаҡмағыҙ.

Урал ғына буйы, ай, ҡаялыҡ
Аша ғына төшһәм — Таналыҡ.
Яуға ғына сығыу, ай, ҡыйыулыҡ,
Ҡыйыу ирҙе тотоу — яманлыҡ.

**Әрме**
Бейек кенә тауҙың башҡайында
Ир-егеткәй ҡурай уйнайҙыр.
Ир-егеткәй, меҫкен, һалдат булғас,
Ат ялына йәбешеп илайҙыр.

**Нуриман һалдат**
Атҡайыма мендем ай ҡалҡҡанда —
Етер еркәйемә барам, тип.
Һонолоп та әсәм ҡулын бирҙе,
Тиҙ әйләнеп ҡайт һин, балам, тип.

**Уйыл**
Менгән генә атым, ай, кир булыр,
Тибенгеһе уның да тир булыр.
Урал буйҡайының аҫыл егете
Данҡайҙары сығыр ҙа ир булыр.

**Еҙем**
Ерән атҡайымда, һай, елергә
Еҙем буйы кеүек ер кәрәк.
Ерән атҡайымды, һай, менергә
Ҡиң күкрәкле батыр ир кәрәк.

**Имәнғол**
Госпиталдең алды таш бағана,
Сәмреғошҡайының һүрәте.
Таш урамҡайҙарҙа юрғалаған —
Имәнғолдоң менгән туры аты.

**Һалдат йыры**
Эй, менгән генә атым, һай, ҡан ерән,
Ҡейгән генә кейемем күк елән.
Эй, ҡан ерән дә атым һауҙар булһа,
Ҡайтып етәм, йәнем, таң менән.

**Күк ыласын**
Беҙ киткән дә саҡта юҡ үләнең
Ат күҙкәйҙәренә етте инде.
Ҡоштар ғына осоп етмәҫ ергә
Ғәзиз башҡайҙарым китте инде.

**Йәйләүлек**
Атҡа ғына менһәң, ай, ат яҡшы,
Ергә генә төшһәң, ер яҡшы.
Илкәйенә ингән яуға ҡаршы
Ат ҡушаҡлап сапҡан ир яҡшы.
Йәйләүҙәре йәмле, ҡымыҙы тәмле,
Нисәү генә һауған бейәһе?
Нисәү булһа ла булһын, эй, бейәһе,
Иҫән генә булһын эйәһе.

### Ҡарт йыры

Егет кенә саҡта elə алманым,
Аҡбуҙатҡа менеп, маһайып.
Һалдатлыҡта үтте ярты ғүмерем,
Инде бикле ултырам һарғайып.

### Азамат

Алыҫтарҙан, ай, күренгән
Ирәндеккәй тауының аҡ ташы.
Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы.

### Карпат

Ат яҡшыҡайҙары, ай, ҡуңыр күк,
Егет менән сығыр Карпатҡа.
Ҡилгән генә юлдар, ай, бик оҙон,
Йорт-илкәйем ҡалды йыраҡта.

### Һыр

Иртәнсәккәй торһам, бер ҡарайым
Һыҙылып та ятҡан ҡош юлын.
Атҡайҙарым арыҡ, кейемем юҡ,
Нисек уҙғарырмын ҡыш көнөн.

### Траншей

Бәләкәй генә турат, ай, матур ат,
Таң алдынан ятып юшай ул.
Ҡыҫып ҡына быуған билкәйҙәрем
Траншейҙа йөрөп бушай ул.

### Порт-Артур

Японд арҙың аттары
Бар ҙа ҡыҙыл, күк ала.
Тағы ла бер йыл һуғыш булһа,
Был донъяла кем ҡала?

Ат ебәрҙем ҡурпыға,
Ҡурпы башын ҡырҡырға.
Дошман һигеҙ, беҙ өсәүбеҙ,
Ниңә унан ҡурҡырға.

### Манжур

Менгән генә атым, ай, бәйләнем
Алмағаскай төбө һалҡынға.
*Ҡушымта:*
Эй-й-й, нужа килһә, тартып ала,
Илтеп Манжурға һала.
Бик ауыр хәл сит илдәрҙә,
Һағынам ярты төндәрҙә.
Уф алла ла тиһәм, йөрәгем яна
Күкрәгемдән сыҡҡан ялҡынға.

### Таш ҡая

Таш ҡаяҡай тигән, һай, биләнгә
Сабып менә һалдат аттары.
Һау булығыҙ, тиеп, беҙ киткәндә,
Илап ҡалды ауыл ҡарттары.

Ат егәбеҙ, тиеп, һай, йөрөрҙәр,
Ялын ғына сәсен үрерҙәр.
Исән генә йөрөп беҙ ҡайтырбыҙ,
Һау кешеләр беҙҙе күрерҙәр.

### Некруттар йыры

Германия аттары
Ебәк менән тышалған.
Германия эфисәре
Ғазраилгә оҡшаған.

### Эскадрон

Урал ғына ҡошо ай һандуғас
Ат менгәндә, моңло һайраны.
Ҡындан алып алмас ҡылысымды
Урал ташҡайына ҡайраным.

Көмөш тә генә эйәр, еҙ ҡойошҡан,
Баҫып менәр ере еҙ генә.
Ғәзиз башҡайыңды һаҡламаһаң,
Зая булыуҙары тиҙ генә.

Көмөш кенә эйәр күк ябыулы
Турсанай ҙа атым билендә.
Бәхетле лә ирҙәр үҙ илендә,
Бәхетһеҙҙәр йөрөй сит илдә.

### Ишмырҙа

Ерәнсәй атҡайҙарым елмәйҙер,
Ҡешегә ғүмер ике килмәйҙер,
Ҡешегә ғүмер ике килмәйҙер,
Егет кенә саҡтың ҡәҙеркәйен
Диуана-ахмаҡ ҡына белмәйҙер,
Диуана-ахмаҡ ҡына белмәйҙер,

### Алатау

Алатауҡай буйы бигерәк бейек
Менеп булмай атҡа атланып.
Ҡулдарыңда малың, ай, булмаһа,
Йөрөп булмай илдә шатланып.

### Елмерҙәк

Елмерҙәккәй тауҙың көн битендә,
Тибен генә тибә ҡара айғыр.
Елмерҙәккәй тауы артта ҡалды,
Менгән атым боролоп ҡарайҙыр.

**Турат сағылы**

Ҡыр ҡаҙҙары ҡунды, һай, туғайға,
Тураҡкайым ҡунды сағылға.
Әжәл елен һиҙеп кешенләне,
Бер боролоп килгән яғына.

Сылтыр-сылтыр көмөш йүгәндәре,
Эйәр ҡашҡайҙары алтынлы.
Сит-ят ҡарап харап ҡына итте
Аҡ ҡанатлы толпар атымды.

**Ҡола атым**

Эй ҡола ат, ҡола ат,
Нишләргә миңә атһыҙ,
Табылмаһаң, ҡола ат,
Ҡалдыраһың ҡанатһыҙ.
Эй, ҡола ат, ҡола ат,
Инде ни хәл итәйем?
Атһыҙ иргә бисә лә юҡ,
Нисек донъя көтәйем?

**Әпәт**

Ерән бейә менән туры бейә
Һауған һайын икешәр эйә.
Хайран малдарымдың иткәйен
Әллә ниндәй дошмандар йейә.

**Юлғотло һунарсы**

Атҡа ла ғына менмәй ҙә, ай, һаҙаҡһыҙ,
Һунарға ғына барған да Юлғотло,
Һунарға ғына барған да Юлғотло.
Һаҙаҡ ҡына уға ниңә кәрәк,
Сөйөр генә булғас бөркөттө,
Сөйөр генә булғас бөркөттө.

**Малтабар**

Арғымаҡкай яңғыҙ, егет малһыҙ,
Малһыҙ ғына егет ҡәҙерһеҙ,
Малһыҙ ғына тиеп кәмләмәгеҙ,
Малды бирә хоҙай тигеҙһеҙ.

**Ялан йыры**

Ерәнсәй ҙә атым, ай, уйнайҙыр,
Алты ай йөрөп йыйған май өсөн.
Егет кенә кеше башын ашай,
Утҡа янып китер мал өсөн.

**Ир-егет**

Алтынлы ла эйәр, алты айыл,
Алтаулы ла атҡа етмәйҙер.
Ир-егеткәй ҡайҙа йөрөһә лә,
Үҙ илкәйе иҫтән китмәйҙер.

**Арғымаҡ яңғыҙ, егет малһыҙ**

Арғымаҡ яңғыҙ, егет малһыҙ,
Малһыҙ егет була шул һанһыҙ.
Малы ла булыр, һаны ла булыр,
Булмайыҡ үҙебеҙ сабырһыҙ.

**Туҡ буйы**

Туҡ буйҡайҙары, ай, бүтәгә,
Ат тояҡҡайҙарын күтәрә.
Йыр йырлауы беҙгә тәсбих түгел,
Йыр йырлауы күңел күтәрә.

Туп-туп итеп баҫҡан туры аттың
Туҫтаҡ кеүек булыр тояғы.
Ирмен генә тигән ир-егеттең
Ат башындай булыр йөрәге.

**Дүнгәүер**

Бәләкәй генә турысай юл башлай,
Эйәрҙәге егет йыр башлай.
Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй,
Беҙҙең генә ғәзиз был башҡай.

**Иргә Нужа**

Иргә нужа килмәй ҙә булырмы?
Ҡилһә нужа, китмәй булырмы?
Ниәтләнеп, егет атҡа менһә,
Ниәтенә етмәй булырмы?

**Бүртә атҡа менеп**

Бүртә атҡа менеп, бүре тун кейеп,
Бүре ҡыуа башҡорт балаһы.
Арт яғыҡайына боролоп ҡарап,
Үкереп илай бүре анаһы.

Бүртә атҡа менеп, бүре тун кейеп,
Бүре ҡыуып булмай, ҡар ҡатҡан.
Йәш саҡтағы көйҙө көйләр инем,
Көйләп булмай инде шул —
ҡартайтҡан.

**Арғужа**

Арғужала буйлап йөрөгәнемдә
Ятып ҡалды ҡайыш дилбегәм.
Дилбегәм дә өсөн ҡайғырмайым,
Ятып ҡалды тыуған илгенәм.

**Ҡалды**

Бәләкәй генә бүртә әкрен юрта,
Әкрен-әкрен баҫып, тиҙ етә.
Ҡырыҡылар ҙа түгел, сәхрәләрҙә
Йәшлек ғүмерем заяға тик үтә.

**Мәхүбә**

Аҡкайымды мендем, ай, китергә,
Ырымбурға барып та етергә.
Ырымбурға еткәс, бүркем һалдым,
Егетем әйтә сабыр ҙа итергә.

**Хәйрүләкәй**

Тып-тып ҡына баҫҡан туратыңды,
Йәнейем кеүек Хәйрүләкәй,
Былбыл булып һайра әле,
Йөҙ илле һум биреп тә һорарҙар.
Сит илдәргә китеп, яҡшы йөрөһәң,
Йәнейем кеүек Хәйрүләкәй,
Былбыл булып һайра әле,
"Ҡайҙан килгән?" —
тип (шул) һорарҙар,
"Кем балаһы?" тип (шул) һорарҙар.

**Маһисәрүәр**

Туп-туп ҡына баҫҡан туры атымдың,
Әсмәбибкәй,
Туҡ буйыҡайында ла, Маһисәрүәр,
ай, төйәккәйе,
Уттарҙа ла янмаҫ та һыуҙа батмаҫ,
Әсмәбибкәй,
Аҫыл егеттәрҙең дә, Маһисәрүәр,
ай, һөйәккәйе.

**Өйҙөрәк буйы**

Өйҙөрәккәй буйы ҡылған ялан,
Елләп-елләп бейә бәйләргә.
Өйҙөрәккәй буйы ҡулдан китһә,
Ни йәм табып йәйҙәр йәйләргә.

**Төйлән буйы**

Ерәнсәй ҙә атым, ай, бик елмәй,
Елһә, ялҡайҙарын йыя алмай.
Үҙҙәре лә егет, ай, була алмай,
Егет булған ирҙе күрә алмай.

**Ерәнсәкәй атым**

Ерәнсәкәй ҙә атым уйнай ҙа,
Сылбыр осҡайынан буйлай ҙа.
Яланда яңғыҙ йөрөгәнемдә,
Күкрәккәйем күпте уйлай ҙа.

**Сыбай ҡашҡа**

Сыбай ғына ҡашҡа ҡырас ялын
Тауҙан ғына өргән ел тарай.
Алыҫ ергә китһәм, сыбай ҡашҡам,
Башҡынайын бороп бер ҡарай.

**Илама, күңелең тулһа ла**

Ат яҡшыҡайҙары, ай, юрта ла,
Тилмерепкәй торалыр кәртәлә.
Үткән генә көндөң рәхәте юҡ,
Нисек булыр икән иртәгә?
Кеймә бүркең, ҡамсат булһа ла,
Илама, дуҫ, күңелең тулһа ла.

**Ғәзиз баш**

Ниәтләнеп егет атҡа менһә,
Ниәтенә етмәҫ булырмы?
Ергә генә нужа, ай, төшөр ҙә
Төшкән нужа китмәҫ булырмы?

**Көмөш кенә эйәр**

Көмөш кенә эйәр һалыр инем,
Менгән генә атым кир булһа,
Баштарымды алып китер инем,
Ышыҡланып торор ер булһа.

**Үткән ғүмер**

Турысай ҙа атым, ай, еләлер,
Йылғырлатып килгән ҡош кеүек.
Үткән генә ғүмерем, ай, буш кеүек,
Ҡалған ғына ғүмерем ҡыш кеүек.

**Уҙған ғүмер**

Күгәреп кенә ятҡан күк арҡаға
Сабып менһәң, атҡа ла көс була.
Үткән ғүмеркәйҙең юҡ билдәһе,
Таң ата ла тағы кис була.

**Күк юрға**

Әйҙәп кенә барған ерәнсәйҙе
Уҙып ҡына китә күк юрға.
Иҫән-һау ҙа булһаҡ күрешербеҙ,
Ғүмерҙәрҙе телә күп йылға
Елә-саба бара күк юрға,
Китһен ғүмер беҙҙең күп йылға.

**Ғүмер**

Күгәреп тә ятҡан күк арҡаға
Ат юрттырып менһәң көс була.
Үткән ғүмеремдең юҡ билгеһе,
Таң ата ла көндә кис була.

**Ҡылысбай йыры**

Урал тауҡайында йылҡы малы,
Һайлап-һайлап мендем һәйбәтен,
Ир ғәҙәтен шунан белерһегеҙ,
Һис һөйләмәҫ кеше ғәйбәтен.

**Ғәфифә**

Бейеккәй ҙә тауҙың, ай, башында,
Ғәфифә,
Ат саптырҙым француз яулыҡҡа.
Ағай-эне менән дуҫ-иштәрем,
Ғәфифә,
Ҡылайыҡ та доға һаулыҡҡа.

**Яҡшы ғына атҡа**

Яҡшы ғына атҡа — яҡшы ҡамыт,
Яҡшы атҡа — яҡшы ыңғырсаҡ.
Уйнап ҡына көлөп күңел астыҡ,
Инде етте беҙгә ҡайтыр саҡ.

**Табын йыры**

Атҡынайы яҡшы, үҙе ҡупшы,
Арғы яҡтан килә бер кеше.
Дуҫ-ишенән уның дошманы күп,
Сер бирмәй ҙә йөрөй ир кеше.

**Ҡурай**

Ике генә ерән, берҙәр көрән,
Эҙе булмай берлән юл менән.
Маңғайҙарға яҙған хаҡ яҙмышты
Һыҙып ташлап булмай ҡул менән.

**Күктә генә болот**

Көмөш кенә эйәр, еҙ ҡойошҡан
Айылдары атҡа етмәйҙер.
Йөҙгенәңдән күҙем, ай, китмәйҙер,
Хаҡ-тәғәлә насип итмәйҙер.

**Суҡ муйыл**

Ҡараташ аҫты суҡ муйыл,
Күтәргеһеҙ күп быйыл.
Ҡоҙаса, һине алам, тиеп,
Атһыҙ ҡалдым мин быйыл.

**Тәҙрәм төбө**

Бәләкәй генә бәләкәй, ай, күк ала,
Күк аланы менер ир бала.
Ир балаҡайҙарҙың ҡулына төшһә,
Бәйле ҡоштай була ҡыҙ бала.

**Аҡ келәт**

Ерәнсәкәй атым һаҙ буйында,
Еҙ эшлийә, ҡамыт муйынында.
Егет ятыр ҡыҙҙың, ай, ҡуйынында,
Ҡыҙ беләге егет муйынында.

**Фариза**

Арҡала ерҙә йылҡы, ай, күҙәттем,
Талдан ҡороғомдо һөйрәттем.
Маҡтап ҡына маҡтап Фаризаны
Тел осонан үбеп уяттым.

**Аръяҡ та остоң**

Менгән генә атым күк буҙҙыр,
Ҡыуған йәнлектәрем ҡондоҙҙор.
Көндә лә генә төндә уйлағаным,
Һарғайғаным, ахыры, шул ҡыҙҙыр.

**Хан ҡыҙы**

— Ай-һай, егет, йәнем егет,
китсе, егет,
Минең ағай уҫал кеше, һиҙер, орошор.
— Ағайыңа алып бирәм ала юрға,
Менеп елеп сығып китһен оҙаҡ юлға.

**Аҡбуҙат**

Аҡ ҡуянҡайҙарҙы мин ҡасырҙым,
Аҡбуҙатым менән баҫтырҙым.
Юҡ йомошҡайҙарҙы бар уҡ итеп,
Ишеккәйҙәреңде астырҙым.

**Илсебай**

Илкәйҙәрем ҡайҙа, ерем ҡайҙа,
Көрән ҡашҡа етмәҫ ер ҡайҙа.
Талдан ғына нескә билдәреңде
Талдырып-талдырып һөйгән йәр ҡайҙа.

**Ай-һай ҙа, гүзәлем**

Менгән генә атым туры булһа,
Сабыр инем, билем талғансы.
Һөйгән дә йәрем үҙемә булһа,
Ай-һай ҙа, гүзәлем,
Һөйөр инем, зауҡым ҡанғансы.

**Ялсығол**

Менгән генә атың, әй, буҙ булһын,
Баҫҡан өҙәңгеләрең еҙ булһын.
Һөйгән генә йәрең, әй, шул булһын,
Ун һигеҙҙәй йәшәр ҡыҙ булһын.

**Йәш йөрәк**

Ерәнсәй ҙә атым, ай, елмәйҙер,
Был ғүмеркәй ике килмәйҙер.
Был ғүмерҙең ике килмәгәнен
Диуаналар ғына белмәйҙер.

**Ат яҡшыҡайҙары**

Ат яҡшыҡайҙары, ай, шул була,
Йоморо тояҡ, бәләкәй башлыһы.
Ҡыҙ яҡшыҡайҙары, ай, шул була,
Ҡара күҙле, ҡара ҡашлыһы.
Ҡеймә бүркең ҡамсат булһа ла,
Илама, йөрәгем, күңелең тулһа ла.

**Турсанай**

Етер ерҙәремә етәйем тип,
Турсанайҙы мендем дағалап.
Өс көн түгел, өс йыл мин йөрөнөм
Һин матур ҙа ҡыҙҙы һағалап.

**Шәүрә килен**

Бәләкәй генә туры, ай, атыңды
Үҙең тотоп, үҙең өйрәттең.
Ят һөйөүҙе, ҡайным, минән күрмә,
Ят һөйөүҙе үҙең өйрәттең.

**Зәғифә**

Атаҡайым, атың да, ай, нуҡталы,
Нуҡталарың һайлап суҡла әле.
Һөймәгәндәй ергә көсләп бирҙең,
Исеңә төшөр, атай, туҡта әле.

**Мәҙинәкәй**

Ерәнсәй ҙә ҡайҙа, яр буйында,
Мәҙинәкәй һылыуым, бөҙрә сәс,
Еҙ ҡанатҡайҙары муйынында.
Матур егет ҡайҙа, ҡыҙ ҡуйынында,
Мәҙинәкәй һылыуым, бөҙрә сәс,
Ҡыҙ беләге егеттең муйынында.

**Ҡыҙ балаҡай**

Парлап та ғына парлап ат ектерҙем,
Мисәүенә уның тай ектем.
Тайҡайҙарҙың хәлен аттар белмәй,
Ҡыҙ балаҡай хәлен ят белмәй.

**Әминәкәй**

Миәс кенә буйы бигерәк ялан,
Ат бәйләр ҙә инем, баған юҡ,
Илап та ғына илап хаттар алдым,
Хат яҙыр ҙа инем, туған юҡ.

**Зәйнәбем**

Зәйнәп һыуға бара ла кем,
Зәйнәп һыуға бара ла кем,
Ҡөйәнтәһен ҡаға ла кем, Зәйнәбем.
Атым ҡайҙа бәйләйем дә,
Атым ҡайҙа бәйләйем дә,
Алма ағас төбөнә кем, Зәйнәбем.

**Сабира**

Ат уйнатып үткәнеңдә
Теҙгенеңде ник тарттың?
Атҡайыңды туҡтатып,
Минең яҡҡа ник баҡтың?
Бер баҡманың, ике баҡтың —
Йөрәгемә ут яҡтың.

Шәл яулығың бәйләгәнһең, дусҡайым,
Әгәр йәнем икәү булһа, дусҡайым,
Әгәр йәнем икәү булһа, дусҡайым,
Береһен һиңә бирер инем, дусҡайым.

Аттар төшмәй шишмәгә,
Аттар төшмәй шишмәгә,
Шишмә һалҡын эсмәгә.
Аттар төшмәй шишмәгә,
Шишмә һыуыҡ эсмәгә.

## ОҘОН ЙЫРҘАР

1. Ағиҙелкәйҙәрҙең аръяғында
Йылҡылары йөрөй болонда.
Ожмахтарың торһон бер яғында,
Шул болонда йөрөгән сағында.

2. Аҡбуҙ аттар менеп, арҡаларҙа,
Сәхрә гиҙҙем — йәмдәр тапманым.
Күп илдәрҙә йөрөнөм, йыһан кистем,
Үҙ илемдәй илдәр тапманым.

3. Алма ғына сыбар атым булһа,
Менмәҫ инем, дуҫтар, туратҡа.
Бәхетле лә берәр бала булһам,
Китмәҫ инем, дуҫтар, йыраҡҡа.

4. Атҡа ғына менһәң, ай, ат яҡшы,
Ергә генә төшһәң, ер яҡшы.
Алтын ғына көмөш яуған ерҙән
Тыуған ғына үҫкән ил яҡшы.

5. Ике лә генә торат, ай, уйнайҙыр,
Теҙгендәре ҡыҫҡа — буйлайҙыр.
Алыҫ ҡына ерҙең шуныһы ҡыйын —
Ваҡыт етмәй ҡайтып булмайҙыр.

6. Йәйҙең генә эҫе селләһендә
Йылҡым сыҡмай киске һалҡынһыҙ.
Үҙ илкәйен һөймәҫ яман ирҙең
Йөрәккәйе булыр ялҡынһыҙ.

7. Көмөш кенә ҡашлы, ай, эйәрҙе,
Һалдым ғына һарат биленә.
Аҡҡош ҡына булып осор инем,
Тыуған ғына үҫкән илемә.

8. Ҡараңғы ла төндә аҡ күренә
Ҡара аткайымдың ҡашҡаһы.
Бигерәк кенә ауыр, бигерәк ҡыйын
Була икән илдең башҡаһы.

9. Турысай ҙа атым, ай, юшамай,
Эйәрләһәң, эсе бушамай.
Ҡайҙа ғына барһаң, бер үк ҡояш,
Тыуған илкәйемә оҡшамай.

10. Урал урмандары шау-шыу итә,
Ҡиблаларҙан елдәр иҫкәндә.
Ҡешнәшәләр йылҡы малҡайҙары
Йәмле йәйләүҙәргә күскәндә.

11. Ағиҙелкәйҙәрҙе аша сыҡтым
Ете йәшәр туры ат менән.
Егет кенә сағың үтһен, егет,
Етмеш ете төрлө дәрт менән.

12. Аҡбуҙ атҡа менһәң, ай тир була,
Аҡ серге лә һалһаң, кир була.
Аталарҙан ҡалған яңғыҙ бала
Ят ерҙәрҙә йөрөп ир була.

13. Анауҙан да килә, ай, бер егет,
Менеп алып аттың һәйбәтен.
Егет кенә кеше, ай, шул булыр,
Һөйләмәҫ ул кеше ғәйбәтен.

14. Ат ашамай күрән үләнде,
Ашайҙыр ҙа сәскә үләнде.
Дошмандарым мине күрә алмайҙыр,
Яраталыр ятып үлгәнде.

15. Ат яҡшыкайҙары, ай, арҡанда,
Ир яҡшыкайҙары тарханда.
Уңған ғына булһаң, дуҫ күрәләр,
Ҡайһы ғына ергә барһаң да.

16. Ат яҡшыкайҙары, ай, буҙ булыр,
Батыр ғына ирҙәр нур булыр.
Төшә күрмә дошман ҡулдарына,
Ғәзиз башҡайҙарың хур булыр.

17. Атҡа ғына менһәң, бик сапма,
Ауыҙлығын уның нык тартма.
Илкәйеңде баҫып яу килгәндә,
Аткайыңа менмәй тик ятма.

18. Атҡа ғына менһәң, һикереп мен,
Аяҡҡайҙарың шул һалынһын.
Сисмә дошмандарға эс сереңде,
Дошмандарың һиңә ялынһын.

19. Атҡынайым килә, ай, талпынып,
Ауыр дуғаларға алынып.
Егет кенә кеше төндә йөрөр
Бер дәрт(е)кәйенә һалынып.

20. Бейек кенә тауҙың баштарында
Ҡара айғыр туҙан туҙҙыра.
Беҙҙең генә кеүек, һай, егеттәр
Йырлап ғүмерҙәрен уҙҙыра.

21. Беҙҙең генә йәйләү бигерәк йәмле
Еҙелекләп ҡолон бәйләргә.
Дошманына ҡаршы сығыр егет,
Ҡуй-һарыҡҡай кеүек әйҙәргә.

22. Егет кенә булһаң, ай, егет бул,
Көмөш ҡойҙор ҡайыш йүгәнгә.
Тоғро ғына һүҙле, асыҡ йөҙлө,
Исемкәйең ҡалһын бүтәнгә.

23. Егет кенә кеше, ай, шул булыр —
Атланмаҫ ул ҡонан, дүнәнгә,
Ир булыпҡай тыуған аҫыл ирҙәр
Үкенмәҫ ул ниңә тыуғанға.

24. Ерәнсәй ҙә менән, ай, көрәнсәй
Тибен тибә тауҙың үңерендә.
Ниҙәр генә килеп, ниҙәр китмәй
Ир-егеткәйҙәрҙең ғүмерендә.

25. Иртән дә генә тороп тышҡа сыҡһам,
Тау буйҡайында йылҡы юҡ.
Уйһыҙ ҙа ғына егет һуйыр ташы —
Уйлы егеттәрҙә йоҡо юҡ.

26. Иртәнсәккәй тороп тышҡа сыкһам,
Арҡаларҙа йөрөгән йылҡым юҡ.
Илебеҙҙә арыҫлан ирҙәр булғас,
Йөрәккәйем тыныс, күңелем туҡ.

27. Ҡөмөш кенә эйәр бик килешә,
Менгән генә атың кир булһа.
Донъя ауырлығы еңел күренә,
Арыҫландай сабыр ир булһа.

28. Менгән генә атым, ай, кир булыр,
Тибенгеһе уның тир булыр.
Атҡа ғына менеп, яуҙы ҡыуған —
Үҙ илендә данлы ир булыр.

29. Менгән генә атым ҡан ерән,
Ҡара урманҡайҙарҙа ҡар тәрән.
Менгән генә атым иҫән булһа,
Башҡынайым ҡайтыр һау-иҫән.

30. Менгән генә атың яҡшы булһа,
Һатаһыңмы тип үк һорарҙар.
Тәрбиәле булып, матур үҫһәң,
Ҡем балаһы тип үк һорарҙар.

31. Селтәрле лә күпер, ай, төҙөк юл,
Дағаһыҙҡай атым бара алмай.
Һандуғасҡай кеүек һайраһам да,
Бер малһыҙҡай һүҙем ярамай.

32. Урап та урап ат сабырға
Ҡыҙыл буйы кеүек ер ҡайҙа?
Бөрйәндәрҙә ирҙәр күп булһа ла,
Һинең кеүек толпар ир ҡайҙа.

33. Һары аттар мендем, һаҙҙар кистем,
Һары атым һалҡын алһын тип.
Илдәремдән биҙҙем, йыһан гиҙҙем,
Ғәзиз башым ғибрәт алһын тип.

34. Юлға ла ғына сыкһам, аҙашамын,
Ни булды икән беҙҙең Туратҡа?
Сабырлыҡтар менән эштәр ҡылһаҡ,
Ирешербеҙ микән моратҡа?

35. Ялан ғына ерҙең, ай, йылҡыһы,
Арҡаларҙа булыр төйәге.
Утта ғына янмаҫ, һыуҙа батмаҫ,
Аҫыл ғына егет һөйәге.

36. Ағарыпҡай ятҡан аҡ түбәгә
Ат юрттырып менһәм, көс була.
Үткән ғүмеремдең юҡ билдәһе,
Таң ата ла көндәр кис була.

37. Ағиҙелкәйҙәрҙе аша сыҡтым
Алты йәшәр ала тай менән.
Йәш ғүмерем минең зая үтте
Алтмыш алты төрлө яй менән.

38. Ат яҡшыҡайҙары, ай, алаяҡ,
Аҡса биреп һатып алайыҡ.
Был ғүмерҙәр беҙгә ике килмәй,
Әйләп ҡымыҙ эсеп ҡалайыҡ.

39. Ат яҡшыҡайҙары, ай, Тимергүк,
Менеп кенә саптым эҙерҙә үк.
Елә лә генә саба етә алманым
Үтеп кенә барған ғүмерҙе үк.

40. Атҡынайым минең, ай, бара алмай,
Талыҡты ғына микән үрҙәрҙә?
Минең генә ғәзиз башҡынайым
Йәшләй барып керҙе гүрҙәргә.

41. Бәләкәй ҙә саҡта, ай, әйләнем,
Елеп-елеп ҡолон бәйләнем.
Йәйләүҙәргә сығып йөрөгәндәр
Ҡилер микән ҡабат әйләнеп.

42. Дөбөр генә дөбөр, ай, дөбөрсәк,
Дөбөрләб үк уйнай ҡолонсаҡ.
Дөбөрләб үк уйнаған ҡолонсаҡтай,
Үтеп китте беҙҙең дәүер саҡ.

43. Ерәнсәй ҙә атымдың елеүе,
Ер ҡырлап та осҡан ҡош кеүек.
Был ғүмеркәйҙәрҙең, ай, үтеүе
Уяулы-йоҡоло күргән төш кеүек.

44. Ерәнсәй ҙә атым, ай, елә алмай,
Маңлай сәскәйҙәрен йыя алмай.
Үткән дә генә ғүмер, ҡалған хәтер
Ҡабат беҙгә ҡайтып килә алмай.

45. Ерәнсәкәй атым, ай, ялдары
Күтәреп тә килгән тыу кеүек.
Үтә лә генә ғүмер, үтә дәүер,
Сылтырапҡай аҡҡан һыу кеүек.

46. Саптар ғына атым саптырырға
Эйәрҙәрен һалдым алмаҫҡа.
Йәш ғүмеркәйҙәрем үтеп китте
Бәхилләшеп кире ҡайтмаҫҡа.

47. Текә генә тауҙың, ай, битендә
Тибен генә тибә Ҡарайғыр,
Ышанмайыҡ, дуҫтар, был донъяға,
Барыбыҙҙы ла йыйыр ҡара ер.

48. Урал ғына сығып, ай, йәйләнем,
Елеп-елеп ҡолон бәйләнем.
Егет кенә дәүерем үтеп китте,
Ҡилмәҫ микән ҡабат әйләнеп.

49. Ай-һай ҙа ғына бейек Урал тауы,
Өҙөләләр ҡолаҡбауҙары.
Ҡолаҡбауҡайҙарын ялғай-ялғай,
Һыҙылалыр йөрәк майҙары.

50. Ай-һай ҙа ғына көндөң, ай, эҫеһе,
Йылҡы сыҡмай киске һалҡынға.
Эскенәйем тулы хәсрәт уты,
Йәш йөрәгем яна ялҡынға.

51. Аҡбуҙатҡа мендем, тир сыҡты,
Аҡ сергекәйемә кер сыҡты.
Янып ҡына барған йөрәгемә
Ҡиблаларҙан һалҡын ел сыҡты.

52. Аҡбуҙ атҡайымды эйәрләһәм,
Аҡ сергекәйҙәрем тир була.
Фәҡир кешеләрҙең, ай, балаһы,
Илай-һыҡтай йөрөп ир була.

53. Аҡбуҙ атҡайыңды тирләтмә,
Аҡ сергекәйҙәрен тирбәтмә.
Башҡайыма ҡайғы төштө тиеп,
Йәш йөрәккәйеңде сирләтмә.

54. Аҡбуҙ атҡайымды тышаулайым
Һыу буйына үҫкән күрәнгә.
Күрмәгәнгә, дуҫтар, күрһәтмәһен,
Түҙем дә генә бирһен күргәнгә.

55. Алыҫтарҙан күренә, ай, бер ялан,
Ат уйната торған ер икән.
Донъя рәхәтлеген күрмәйенсә
Үсеп кенә килгән ир икән.

56. Арҡа өҫтәрендә, ай, ат уйнай,
Түбә өҫтәрендә төлкө уйнай.
Беҙҙең генә кеүек фәҡир кеше
Көн итеүкәйҙәрен көн дә уйлай.

57. Ат эйәрләп мендем, ай, китергә,
Ниәт иткән ергә етергә.
Ниәт иткән ергә етә алмағас,
Белә алманым ни хәл итергә.

58. Атҡынайым китте, ай, юл буйлап,
Үҙгенәйем китте һыу буйлап.
Аҡылһыҙ уҡ бала түгел инем,
Аҡылдарым бөттө күп уйлап.

59. Атым аяғында, ай, бығау бар,
Бығау киҫә торған игәү бар.
Моңайма ла, башым, түгелмә, йәшем,
Моң тарата торған йырау бар.

60. Бейек кенә тауҙың, ай, башында
Өйөр йылҡы йөрөй көтөүһеҙ.
Кеше лә генә белмәй, мин әйтмәймен,
Эскенәйем яна төтөнһөҙ.

61. Бурыл ғына атым, ай, менәйем,
Менеп кенә елеп киләйем.
Уңлы ла ғына һуллы ҡашым тарта,
Ни булырҡайҙарын белмәйем.

62. Ерән генә йылҡы, ай, ҡыуалыр
Тау буйына берләм юл менән.
Нурлы ғына йөҙҙәр, ай, һарғая,
Төрлө хәсрәт, төрлө уй менән.

63. Ерән атым микән, ай, салҡыған,
Етегән йондоҙ микән балҡыған?
Хәсрәт тә микән, ай, дәрт микән,
Йәш йөрәгем башын талҡыған?

64. Ерән генә ҡашҡа атҡа менеп,
Тау буйлатып килә бер кеше.
Эйелеп кенә бөгөлөп йәшәһә лә,
Өмөт менән йөрөр ир кеше.

65. Ерәнсәй ҙә аттың, ай, юрғаһы
Мәргән егет атҡан уҡ кеүек.
Уй-хәсрәткәйҙәрем, ай, юҡ кеүек,
Йөрәккәйем яна ут кеүек.

66. Ерәнсәй ҙә атым, ай, елеүе,
Ер бауырлап оҫкан ҡош кеүек.
Ошо ултырыуым бик мәхрүм,
Ҡанатҡайы һынған ҡош кеүек.

67. Ерәнсәй ҙә атым, ай, елә алмай,
Ҡамсыларым юҡтан күрәмен.
Ҡайҙа ғына барһам, юлым уңмай,
Бәхеттәрем юҡтан күрәмен.

68. Ерәнсәй ҙә атым бәйләп ҡуйҙым
Ҡибла яҡтан өргән һалҡынға.
Уф алла ла тиһәм, донъя көйә,
Күкрәгемдән сыҡҡан ялҡынға.

69. Ерәнсәй ҙә атым елгән саҡта
Ҡаршы килгән кеше юл бирә.
Илама ла, башым, түгелмә, йәшем,
Йән биргәнгә донъя йүн бирә.

70. Ерәнсәй ҙә атым менеп сыҡһам,
Йөрөп кенә киләм күп ерҙән.
Бәхеткәйем минең кәм булмаһа,
Кәм үк түгел инем күп ирҙән.

71. Ерәнсәй ҙә атым ял ҡойроғон
Мин үрмәһәм, уны ла кем үрһен.
Илама ла, башым, түкмә йәшең,
Һин күрәһеләрҙе кем күрһен.

72. Ерәнсәй ҙә менән, ай, Көрәнсәй,
Юрғалайҙыр тура юл менән.
Нужа күреп, рәхәт күрә алмаған,
Бер беҙ түгел — бөтә ил менән.

73. Ике генә турат мин һимерттем
Бура ғына төбө бойҙайға.
Минең генә былай зарланғаным
Мәғлүм генә булһын хоҙайға.

74. Иртәнсәккәй тороп, ай, ҡараһам,
Өй буйында йөрөгән йылҡы юҡ.
Уйламаған саҡта һис нәмә юҡ,
Уй уйлаған ирҙә йоҡо юҡ.

75. Көмөш кенә эйәр бик килешә,
Менгән генә атың кир булһа.
Ҡайҙа ғына барһаң, мәхрүм булмай,
Бәхетле лә тыуған ир булһа.

76. Көмөш кенә эйәр, ҡайыш тартма,
Өҙәңкейҙәре лә еҙ генә.
Үҙ-үҙекәйеңде һаҡламаһаң,
Зая булыуҙары тиҙ генә.

77. Көмөш кенә йүгән, еҙ ҡойошҡан,
Эйәләре белмәй — ат белә.
Эскенәйем тулы ҡайғы-хәсрәт,
Үҙ туғаным белмәй, ят белә.

78. Көтөүемде әйҙәп, әй, ебәрҙем
Аҡташ тауы араларына.
Низәр генә килеп, низәр китмәй
Ата-инә балаларына.

79. Ҡара урмандарҙан сыҡҡан саҡта
Ҡара атым саба әлһерәп.
Аҡыллы ла башым тиле итте
Баштарыма төшкән хәс(е)рәт.

80. Менгән генә атым, ай, ҡыҙыл күк,
Егеп кенә сыҡтым эңерҙүк.
Ҡайғы ғына хәсрәт бөтөрмө икән
Әллә китер микән ғүмергүк?

81. Һары атҡа мендем, һаҙҙар кистем,
Һаҙҙың һалҡындары алһын тип.
Ултыра ла тороп тауға сыҡтым,
Йөрөгән дә ерем ҡалһын тип.

82. Һауаларҙа, дуҫтар, ай, ҡош уйнай,
Ир ҡулҡайҙарында ат уйнай.
Аталарҙан егет йәшләй ҡалһа,
Көн итеүкәйҙәрен көн дә уйлай.

83. Һауаларҙа йондоҙ, ай, нисә лә,
Нисә генә ҡарама, күсә лә.
Был донъяҡайҙарҙың рәхәтлеге —
Яҡшы ат менән һылыу бисәлә.

84. Әйҙәп кенә ҡыуған йылҡымдың
Күк кенәһе бар ҙа, буҙы юҡ.
Минең генә күргән хәсрәтемдең
Ялҡындары бар ҙа, ҡуҙы юҡ.

85. Ат ебәрҙем, дуҫтар, ҡурпыға,
Ҡурпы ғына башын ҡырҡырға.
Йөҙ дошманым булһа, мең дуҫым бар,
Ниңә дошмандарҙан ҡурҡырға?

86. Аяҙ ғына көндө ҡаты буран,
Әйләндереп булмай йылҡымды.
Дуҫ-иш(е)кәйҙәрем иҫемә төшһә,
Ятып йоҡлап булмай йоҡомдо.

87. Бәләкәй генә бүртә һикереп юрта,
Етәм тигән еренә тиҙ етә.
Ашаһаң да бөтә, кейһәң туҙа,
Татыулыҡкайҙарға ни етә.

88. Еккән инек аттың яҡшыһын
Ҡиске һалҡын менән юртырға.
Төкөрһәнә дошман һүҙенә,
Дошман тәңре түгел ҡурҡырға.

89. Ерәнсәй ҙә атым елгән саҡта,
Саң урала бауыр аҫтына.
Ғәзиз генә башыбыҙ һау булғанда,
Дошмандарыбыҙ — аяҡ аҫтында.

90. Ерәнсә лә атым, ай, ялдарын
Алтын тараҡ менән тарайым.
Һеҙ дуҫҡайҙарым килә тигәс,
Арҡаларға менеп ҡарайым.

91. Ерәнсә лә атым шунан өркә —
Юл буйында ҡара ҡусҡарҙан.
Минең күңелкәйем шунан ҡурҡа:
Дуҫ-иш булып йөрөгән дошмандан.

92. Менгән аты яҡшы, үҙе матур,
Арғы яҡтан килер бер кеше.
Дуҫ-ишенән дошман күп булһа ла,
Сер бирмәй ҙә йөрөр ир кеше.

93. Туҡ буйҡайҙарын, ай, буйлатып
Ат саптырҙым француз яулыҡҡа.
Ағай-энеләрем, онотмағыҙ,
Доға ҡылығыҙ минең һаулыҡҡа.

94. Турысай ғына аттың ял-ҡойроғон
Күңелем бөтмәй, үҙем үрмәһәм.
Дуҫ-иш ташлаһа ла, мин ташламам,
Һеҙҙән элек үҙем үлмәһәм.

95. Турысай ғына атым әкрен юрта,
Әкрен генә юртып тиҙ етә.
Ашағандар бөтә, кейгән туҙа,
Татыулыҡҡайҙарға ни етә.

96. Турысай ғына атым ялын тарай
Ҡибла ғына яҡтан өргән ел.
Гәүһәр-яҡуттарҙан ҡиммәт икән
Дуҫ-иш менән уйнап-көлгән ер.

97. Аҡбуҙ атҡа менеп йөрөһәм ине,
Урал ғына тауҙы буйлатып.
Ҡөрәгәләр алып, дуҫ-иш йыйып,
Ултырһаң ине ҡурай уйнатып.

98. Арҡаларҙа йылҡы, ай, юшайҙыр,
Айғырҙары ярһып кешнәйҙер.
Йырлағым да килеп йырламайым,
Йыр йырлаһам, күңелем бушайҙыр.

99. Атҡа ла менһәң, һикереп мен,
Ат бауырҡайҙары һелкенһен.
Урамдан ғына үтһәң, көй көйләп үт,
Йоҡлап ятҡан ҡыҙҙар елкенһен.

100. Атҡынайым китте сылбыр һөйрәп,
Тоттормаҫ та микән, йүгерһәм.
Ташҡан күңелдәрем асылыр микән,
Һеҙ туғандарымды бер күрһәм.

101. Баҙарҙарға барып ни алайым
Аҡбуҙ атҡайыма теҙгенгә?
Һеҙҙең генә менән бер ултырһам,
Гүйә, хәлем етә йөҙ меңгә.

102. Башҡынайы күндер, ҡуңысы киндер,
Ҡуңысынан бөрөп тә бәйләнгән.
Ҡөрәгәләр тултырып, бейәләр һауып,
Башҡорт меҫкен йылҡы әйҙәгән.

103. Бейек кенә тауҙың башҡайында
Тибен үк тибә икән ҡара кир.
Ашайыҡ та эсәйек, уйнайыҡ, көләйек,
Барыбер баҫа беҙҙе ҡара ер.

104. Ерәнсәккәй атым елгән саҡта,
Ышлыяһы уның киң кәрәк.
Боронғо ла йырҙар йырлар өсөн,
Аҡ ебәктән йомшаҡ тел кәрәк.

105. Менгән генә атың юртаҡ булһа,
Ос(о)раған ирҙәр юл бирә.
Уйнап ҡына көлөп ултырайыҡ,
Йән биргәнгә хоҙайым йүн бирә.

106. Туры атҡайҙарым, ай, йүгәнле,
Йүгәндәрен уның һалдырмам.
Үҙ хәтеркәйҙәрем ҡалһа, ҡалһын,
Дуҫ-иштәрҙең хәтерен ҡалдырмам.

107. Аршын ғына ярым ҡарҙар яуа,
Батыр ғына аттар юл башлар.
Йәш сағында ғына һөйгән йәрен,
Ҡем диуана булһа, шул ташлар.

108. Атҡа ғына менһәң, мен яҡшыһын,
Ҡиң күкрәкле, бейек башлыһын.
Ҡыҙҙы ғына һөйһәң, һөй матурын,
Аҡ сырайлы, ҡара ҡашлыһын.

109. Атҡайымды бәйләнем ҡылғанға,
Атҡынайым биле талғанға.
Бер ултырам, йәнем, бер торамын
Йөрәккәйем янып барғанға.

110. Егет тә генә булһаң, мен ҡара атҡа,
Ҡара аттарға ҡамсы кәрәкмәҫ.
Йәрҙәрҙе лә һөйһәң, һөй матурын,
Матур йәргә яусы кәрәкмәҫ.

111. Елә лә генә юрта йөрөгәнемдә,
Елдәр аса минең ҡуйынымды.
Илай-һыҡтай ғына йөрөгәнемдә,
Матур ҡыҙҙар аса күңелемде.

112. Ерәнсәкәй аттың ялбыр ялын
Ел тарайҙыр өстән үрһәм дә.
Һин, һылыуҡайымды, ҡыҫып һөйһәм,
Үкенмәйем иртән үлһәм дә.

113. Ерәнсәкәй атым, ай, шәплеген
Саналарға еккәс белерһеҙ.
Был донъяҡайҙарҙың рәхәтлеген
Ҡыҙ ҡуйынына кергәс белерһеҙ.

114. Ҡашҡайҙарың һинең бигерәк ҡара,
Яҡшы аттарға еккән дуғалай.
Буйығынайың һинең бигерәк зифа,
Ағиҙелдә үҫкән ҡыуғалай.

115. Менгән дә генә атым, ай, буҙҙыр,
Аулаған да йәнлек ҡондоҙҙор.
Көндә генә төндә йоҡламайса,
Бөтә уйлағаным шул ҡыҙҙыр.

116. Һары атҡайҙарым һаҙ буйында,
Еҙ ҡамытҡайҙары муйынында.
Һинең менән генә даным сыҡты,
Йәнем сыҡһын ине ҡуйыныңда.

## ҠЫҪҠА ЙЫРҘАР, ТАҠМАҠТАР

1. Аҡбуҙ атта күп йөрөнөм,
Һыу буйында атланып.
Һинең шәүләләрең күрһәм,
Йүгереп сығам шатланып.

2. Аҡбуҙ атым бик шәп килә,
Башын үргә һикертеп.
Үҙәккәйемде өҙәһең,
Ҡашың-күҙең һикертеп.

3. Аҡбуҙ атым уйнайҙыр,
Үлән йәшел сағында.
Әйҙә, йәнем, һайрашайыҡ,
Тура килгән сағында.

4. Алайыҡ аттың алаһын,
Алдыртайыҡ дағаһын.
Һең(е)леһе матур булғас,
Дуҫ итәйек ағаһын.

5. Алтын эйәр, хәтфә мендәр
Эйәрләнем аттарға.
Аппаҡайым, алмаҡайым,
Күҙең һалма яттарға.

6. Арғы яҡтың үләнен,
Ат ашамай күрәнен.
Иртән уйҙа, көндөҙ иҫтә,
Кис төшөмдә күрәмен.

7. Ат бәйләнем ҡайынға,
Ҡайындың һалҡынына.
Ултырһам, үләндәр көйөр,
Йөрәгем ялҡынына.

8. Аттарымды бәйләп ҡуйҙым,
Маяҡ таллыҡтарына.
Минең дә иҫкәйем китмәй
Кеше ҡалдыҡтарына.

9. Атымдың дағаһы алтын,
Һынһа ла алдырманым.
Үҙем үлмәй, гүргә кермәй
Яттарға ҡалдырмамын.

10. Беҙ бәләкәй саҡтарҙа,
Һикереп мендек аттарға,
Ағай үлеп, еңгәй ҡалһа,
Ебәрмәнек яттарға.

11. Беҙҙең аттарға килешә
Урам йүгәндәр генә.
Һағынып һөйләүҙәргә ҡалыр
Бергә йөрөгәндәр генә.

12. Беҙҙең бейек тауыбыҙ,
Өҙөлә ҡамыт бауыбыҙ.
Йыл тәүлеге ун ике ай,
Һыҙыла йөрәк майыбыҙ.

13. Бейек тауға менмәҫ инем,
Тау башында аттарым.
Ҡысҡырып йырламаҫ инем,
Бик һағынған саҡтарым.

14. Бөгәсә кис бер төш күрҙем,
Аҡбуҙ атҡа атландым.
Күргән төшөм дөрөҫ килде,
Һеҙҙе күреп шатландым.

15. Ике матур һыуға бара,
Бирсәткәһе ҡара ла.
Уны егет күреп ҡалһа,
Ат эсерә бара ла.

16. Ике пар ат һимерттем
Ун биш көндә тоҙ менән.
Бөтһөн малың, сыҡһын йәнең,
Үҙең һөйгән ҡыҙ менән.

17. Ҡара атҡа ҡара дуға,
Егеп ебәрәһеңме?
Йәлләмәйсә ят ҡулына
Биреп ебәрәһеңме?

18. Ҡара дуға, еҙ алҡа
Байҙар егә дан өсөн.
Күп егеттәр башын юя
Табылмаған мал өсөн.

19. Ҡара урманға кергән саҡта,
Атың ҡурҡаҡ булмаһын.
Ҡояшы уртаҡ булһа ла,
Йәрең уртаҡ булмаһын.

20. Менгән атым буҙ ғына,
Эйәрҙәре еҙ генә.
Бар илеңдән сығып киткәс,
Ҡайтып булмай тиҙ генә.

21. Менгән атым күк буҙҙыр,
Йәнлек аттым — ҡондоҙҙор.
Көнөн-төнөн йоҡламайса,
Уйлағаным — шул ҡыҙҙыр.

22. Минең атым бар ине,
Ял-ҡойроғо ҡара ине,
Үткән йылды был ваҡытта
Нindәй ҡайғым бар ине.

23. Туры атҡа ултырып,
Ҡаршығыҙҙан үтербеҙ.
Әгәр йәшең тулмай торһа,
Тағын бер йыл көтөрбөҙ.

24. Туры аттарға бәйләп ҡуйҙым,
Һалҡын һулыу алһын тип,
Тыуған илде ташлап китәм,
Башым ғибрәт алһын тип.

25. Тып-тып баҫҡан туры ат,
Тояҡтары йәшел тут.
Төшмәһен ғишҡың матурға,
Бер ҙә һүнмәй торған ут.

26. Һандуғас һайраған була,
Тешен ҡайраған була.
Ат туғарып егә белмәй,
Ҡыҙҙар һайлаған була.

27. Һыу буйында көрән атым
Һаҙ үләнен утлайҙыр.
Ғишыҡһыҙҙың йәне тыныс,
Ятһа, үлеп йоҡлайҙыр.

28. Ат менән әйләнергә.
Һеҙгә лә кәрәкмәй ине
Ят менән бәйләнергә.

29. Аттар атламаҫ инде.
Һине миңә, мине һиңә
Яттар маҡтамаҫ инде.

30. Аттар атлатып ҡына.
Береһен һөйәм мәңгелеккә —
Бер(е)һен алдатып ҡына.

31. Үҫә икән, бешә икән
Ҡырҙа ат ҡуҙғалағы.
Бейеүсегә бик ҡарайһың,
Йөрәгең ҡуҙғаламы?

32. Ялын тарайҙар уның.
Матурлығын һорамайҙар,
Аҡылын ҡарайҙар уның.

## ЙОЛА ЙЫРҘАРЫ

1. Ҡырас ҡына яллы ҡара ат менеп,
Ил аралап, килгән был егет;
Атаһы ла түрә, үҙе мырҙа,
Ҡәҙерле лә үҫкән бай егет.

Теҙгенендә уйнай толпар аты,
Ҡыҙ күҙләргә уйлап килгәндә:
Ҡалталары тулы тәңкә менән,
Услап алыр бүләк биргәндә.

2. Ил аралап килгәнһең,
Ат тирләтеп елгәнһең.
Алыҫ ерҙәге һылыуҙы —
Әллә төштә күргәнһең.

3. Һәлпәң-һәлпәң һәлпәңләп,
Ҡулыңа таяҡ таянып,
Бер балағың һалпайып,
Өс өй аша йортоңдан,
Арыҡ атың атланып,
Ҡырма кәпәс башыңда,
Башың үргә ҡайҡайып,
Ҡайҙа юлың тоҫҡаның?
Суҡмарҙай ҙур танауың
Шыр-шыр тартып, еҫкәнеп,
Емтек эҙләр ас эттәй,
Атҡа менеп эҙләнеп,
Ниңә килеп туҡтаның?

4. Ай, кейәүкәй, кейәүкәй,
Менгән аты туры икән.
Суҡлы ла билбау быуырға
Биле лә егеттең ҡупшы икән.

5. Батыры юҡ, аҡ толпар,
Сапһа, бауыр яҙа алмаҫ,
Йола белмәҫ кейәүҙәр
Ҡыҙын эҙләп таба алмаҫ.

6. Беҙгә килгән ҡоҙаларҙың
Еккән аттары ҡола.
Йыртыш һорай тип көлмәгеҙ —
Борондан ҡалған йола.

## СЕҢЛӘҮҘӘР

1. Атаҡайым, атың күпме ине,
Серге буйҡайҙары суҡмы ине?
Атаҡайым, мине йәшләй бирҙең,
Аҫырар хәлкәйҙәрең юҡмы ине?
Эй-й-й...

2. Атаҡайымдың атҡынаһы
Сығып киткән ҡамышҡа.
Атайымдың биргән ере
Кейәү ҙә түгел, абышҡа.
Эй-й-й...

3. Атаҡайымдың да аттары
Һыуҙан ғына сыҡҡан балыҡтай.
Атаҡайымдың биргән ере
Янып та торған тамуҡтай.

4. Егәрләнеп йөрөп ат егәһең,
Талмай ҙа, атайым, беләккәйең.
Теләмәгән көйө биреүгә
Янмай ҙа, атай, йөрәккәйең.

5. Ерәнсәкәй атым елмәйҙер,
Ул елһә лә, йәлләп менмәйем;
Бармаҫ ҡына ергә бирҙең, атай,
Һин бирһәң дә, мөрхәтһенмәйем.

6. Күк юрға менән буҙ юрға
Ҡалырҙар микән кешнәшеп.
Әсәкәйем, инде мин китәм,
Күрешергә килдем хушлашып.

7. Ҡапҡа төбөнә тай туҡтаған,
Асып ебәр, атаҡай, ҡапҡаңды,
Биргән малдарын кире ебәр,
Алып ҡал, атаҡай, балаңды.

8. Ҡапҡаларҙан сыҡҡан саҡта
Пар аттары тулай башланы.
Һау бул да, әсәкәйем, тигән инем,
Барыһы ла илай башланы.

9. Ҡушлап та ҡушлап ат ектем,
Уртаһына уның тай ектем.
Тай тигәнем минең ат булды,
Атаҡайым миңә ят булды.

10. Ҡылсылдама, тимен, турысай,
Ҡыл дилбегәнде өҙөрһөң.
Илама лә, әсәйем, илама,
Үҙегеҙ биргәс, түҙерһең.

11. Миәскәй ҙә буйы бүтәгә,
Ат аяҡҡайҙарын күтәрә.
Әбей ҙә бабай, хуш булығыҙ,
Ат егелгән беҙгә китергә.

12. Мәрйен дә теҙҙем ебәккә,
Йылҡы ла ебәрҙем төбәккә.
Йәштән биреүҙәрең, атаҡайым,
Төйөн генә булды йөрәккә.

13. Яңы ғына инем ҡолонсаҡ,
Көйәнтәләр алыуым яңы саҡ.
Атаҡайым, һинең ҡулдарыңда
Ун дүрт кенә йыл торҙом саҡ.

14. Ағаҡайым, кир туратыңды
Бәйләйһең ҡайын төбөнә.
Ун биш йәштән биреп ҡуйғаныңса,
Ташлатһаңсы һыуҙың төбөнә.

15. Атыңа бесән һал, еңгәкәй,
Ауыҙлыҡтарын ал, еңгәкәй.
Башыма яулыҡ япҡансы,
Татлы йәнемде ал, еңгәкәй.

16. Йылҡынан була ҡола тай,
Һыйырҙан тыуа танаҡай.
Туғаныңды утҡа һалдылар,
Йәл түгелме һиңә, ағаҡай?

17. Аршын да аршын аҡ уҡа алдым —
Аҡбуҙ атҡайыма дилбегә.
Илап та илап суҡ бәйләйем
Тыуған илкәйемә билгегә.

18. Ат егелгән беҙгә китергә,
Ултырғандар кәңәш итергә.
Хаҡ тәғәлә миңә ҡушҡан икән
Яттар менән ғүмер итергә.

19. Ике лә туры пар ектем,
Урталарына тай ектем.
Тайҙар хәлен аттар белә,
Беҙ меҫкендең хәлен кем белә?

20. Йылға ғына буйы күк үлән,
Ашап ҡына тора кир дүнән.
Минең генә сәсем бәйләнегеҙ
Утыҙ йәшкә оло ир менән.

21. Эй, аҡ татыр, аҡ татыр,
Ат аяҡҡайҙарын аҡһатыр.
Тиңдәштәрем менән йөрөгән ерем
Күк үләнкәй үҫмәй ҡаҡ ятыр.

22. Алда ла киткән атымдың
Ышлыялары йәшел суҡ.
Димсе лә булған Ҡамалиҙы
Илаһи ҙә барып йәшен һуҡ.

23. Ҡоҙаларҙың аттары
Тәртә лә төбөн кимерә.
Беҙгә килгән ҡоҙалар
Араҡыға тилмерә.

24. Ҡылсылдама, ерәнкәй,
Ҡыл дилбегә һиңә килешмәй.
Ҡыпандама инде, ҡоҙағый,
Ҡеше шәле һиңә килешмәй.

25. Оҙон ҡойроҡ саптар бейә —
Буҫағаңа бүләккә;
Шеш мөгөҙлө ҡуңыр һыйыр —
Киленсәккә теләккә.

26. Ҡола йылҡың ҡолонлап,
Ҡола ялан тултырһын;
Һыйырҙарың күп булып,
Ҡулың майҙар умырһын.

Толпар аттай юшаған
Ҡанаттарың йәйелһен,
Ауыл-ауыл ултырып
Ырыу-ырпағың йәйелһен.
Ҡола йылҡың ҡолонлап,
Ҡола ялан тултырһын,
Ала йылҡың ҡолонлап,
Ала ялан тултырһын.
Ҡонажының ҡолонлап,
Күңеленде тултырһын.
Дүнәжәнең ҡолонлап,
Һабаң түрҙә ултырһын.